ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30-5 октябрь - ноябрь (карасай - ҡырпағай) 2021

№44 (982)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 731 һум 66 тингә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, дуҫтарына яҙҙырып та бүләк итә ала. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Йөҙ зә дүрт йыл элек... 2-3



Күпер асыла 5



Теләйем... Ярамай... 6



Беҙ - башҡорттар 12-13



ТВ-программа 14

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Төрлө илдәрҙә төрлө ваҡытта Олатайҙар һәм өләсәйҙәр көнө үткәрелә, ә беҙҙә уларҙың байрамы октябрь аҙағына тура килә. Үҙегеҙҙең олатай-өләсәйлек вазифағыҙ тураһында һөйләгеҙ әле...***

***Гүзәл КӘРИМОВА, Күгәрсен районы:*** Өләсәй-олатайлы булыу бала саҡты бәхетле, ғәмһеҙ иткән күренеш ул. Беҙ үҙебеҙ ғаиләлә алты бала үҫтек. Ике яҡтан да өләсәй ҙә, олатай ҙа булды. Беҙҙең яҡта атайҙың ата-әсәһен ҡартатай, ҡәрсәй тип йөрөтәләр. Улар күрше ауылдарҙа ғына йәшәгәс, көн һайын булмаһа ла, көн-ике көн аша йә беҙ үҙебеҙ барабыҙ, йә улар беҙгә килә торғайны. Килгән, барған һайын иң тәмле күстәнәстәр менән һыйлай торғайнылар. Шул тәмле-татлыны ашағы килеп тә йәйәүләп сығып киткәнбеҙҙер инде атай-әсәйҙән ҡасып. Балалар күп булғас, кәнфит-печеньены ла еткерә алмағандарҙыр инде өйҙә. Нисә барһаҡ та, өләсәй ҙә, ҡәрсәй ҙә ҡояш һымаҡ йылмайып ҡаршы ала торғайнылар. Оло кешене әйҙүкләп саҡырған кеүек, түргә ултыртып сәй эсерәләр. Иплән кенә өйҙәге хәл-әхүәлде һорашалар. Йылы ғына ҡулдары менән сәсте һыпырғандарын, арҡанан дөпөлдәтеп һөйгәндәрен әле булһа хәтерләйем. Үҙебеҙ күптән өләсәй-олатай булып бөтһәк тә, уларҙың аҡыллы кәңәштәре һаман йөрәк түрендә, яҡты маяҡ кеүек барыр юлды яҡтыртып тора төҫлө. Атай-әсәйҙән эләккән саҡта ла уларға һыйына, уларҙан яҡлау эҙләй торғайныҡ. Артыҡ иркәләмәһәләр ҙә, үтә талапсан булманылар. Өләсәй, олатай һөйөүен татыу бәхете тейҙе, шөкөр. Үҙебеҙҙең балаларҙың да осондороп, ҡанатландырып ебәргән өләсәләре, олаталары булды. Хәҙер бына үҙебеҙ ейән-ейәнсәрҙәрҙе ҡулыбыҙға алдыҡ. Улар беҙҙең өсөү. Баланың балаһы балдан татлы, тигәндәре шул тиклем раҫ.

Өләсәй, олатай наҙын, иғтибарын тойоп үҫкән балалар уларҙың һөйөүен күрмәгәндәрҙән ныҡ айырыла, тип уҡығаным да, ишеткәнем дә бар. Ысынлап та, шулай. Оло быуындың тарихын, легендаларын, әкиәттәрен тыңлап үҫкәндәрҙең күңеле нисектер йомшағыраҡ, изгелеклерәк, кешелеклерәк һымаҡ.

Беҙ ҙә өләсәй-олатайлыҡ вазифабыҙға яуаплы һәм етди ҡарарға тырышабыҙ. Тыуғандан һуң дүрт ай үткәс тә өсөһөнә лә Һаҡлыҡ банкыһында вклад астыҡ. Ай һайын аҙ булһа ла аҡса һалып барабыҙ. 18 йәштәре тулғас, һаҡлыҡ кенәгәһен бүләк итәсәкбеҙ. Иң оло ейәнебеҙ быйыл үҙенә тәғәйен аҡсаны алды ла инде. Ҡыуанып, рәхмәтле булып ҡабул итте ул. Санкт-Петербургҡа уҡырға ингәндә кәрәгенә тотонор тип ҡулына тотторғайныҡ, юҡ-барға сарыф итмәне, машина алырға теләк белдерҙе. Бюджет нигеҙендә уҡыһа ла, ҙур ҡалала ҙур аҡса кәрәк бит, ай һайын олатаһы үҙенең пенсияһынан өлөш сығара. Теге ике бәләкәйенең кенәгәһенә лә һалыуыбыҙҙы дауам итәбеҙ. Инфляция булһа, аҡса үҙгәрһә, тип беҙҙе кире өгөтләгәндәр ҙә булды, унда беҙҙең миллиардлап йыйылмай бит, бер ҡурҡынысы ла юҡ. Йыйған йыйған инде, булғанды тулыһынса тотоноп барған кеүек түгел. Беҙ хәҙер икебеҙ ҙә хаҡлы ялда. Күпләп ҡошҡорт аҫрайбыҙ. Егерме бройлерҙы дүрткә бүлеп, Питерҙағы студент ейәнебеҙҙең һыуытҡысын тултырып ҡуйыуҙы ла үҙебеҙҙең бурыс тип иҫәпләнек. Беҙгә хәҙер күп кәрәкмәй, ҡалғаны етә. Форсат булғанда, дебеттән, йөндән ойоҡ, бейәләй, башалтай, шарф, бирсәткә бәйләп һатһам да, унан килгән килемде оло ейәнебеҙгә инселәп һалып ҡуям. Хәҙер бала уҡытыу бик ҡыйбатҡа төшә бит. Юлына, фатирына, ашарына кәрәк. Түләүһеҙ уҡыу тигәне ҡағыҙҙа ғына бит ул.

## ЗАМАН БАШҠОРТО

# БЕРЕНСЕЛЕККӘ ЫНТЫЛЫШ...

## йөрәгенә сәм булып һалынған

**2019 йылда шашка буйынса үткән донъя чемпионаты призеры, 2012 һәм 2020 йылдарҙа - блиц буйынса донъя чемпионы, 2016 йылда - Европа чемпионы, тиҙ шашка уйынында донъя чемпионы, халыҡ-ара гроссмейстер... Уның еңеүҙәрен һанай китһәң, ошо йәш кенә ҡыҙ был тиклем ҡатмарлы ярыштарҙа ҡасан ҡатнашып өлгөрҙө, ҡайҙан килә икән ундағы көс, рух ныҡлығы, беренселеккә ынтылыш, тип һоҡланмай булмай. Бына яңыраҡ, Республика көнөндә ул тағы ла тыуған төйәгенә бүләк яһап, халыҡ-ара шашка буйынса Европа чемпионатында ҡатын-ҡыҙҙар араһында блиц дисциплинаһында еңеү яулап ҡайтты. Һеҙ мәҡсатлы милләттәшебеҙ Айгөл Илдус ҡыҙы ИҘРИСОВА тураһында барғанын аңлағанһығыҙҙыр инде. Көсөргәнешле уйындарҙан бер аҙ ял иткән осоронда уны редакциябыҙға саҡырып, әңгәмәләшергә форсат тыуҙы.**




(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).

✓ *Һөйләшергә генә түгел, ә халҡыбыҙҙың тарихына ла ҡыҙыҡһыныу уятырға тырышам. Сөнки туған теле менән, халҡы, милләте менән ғорурланһын өсөн данлы үткәнебеҙҙе белергә тейеш, тип уйлайым.*



БЫЛ АЙҘА...

# ЙӨҘ ҘӘ ДҮРТ ЙЫЛ ЭЛЕК...



**Ҡырпағай - көҙҙөң һуңғы айы - ҡыш башы. Был айҙа тәбиғәт йыл миҙгелдәренең иң һыуыҡ, ҡаты осорона әҙерләнә: һуңғы япраҡтарҙы әсе ел өҙгөләй, осар ҡоштарҙың да иң аҙаҡҡа тороп ҡалғандары йылы яҡтарға китеп бөттө. Йонсоу көндәр, рашҡы мәле етә, ҡар ҡатыш ямғыр яуа һәм, ниһайәт, ер өҫтөнә ҡырпаҡ ҡар ята. Урмандарҙа һиллек: һайрар ҡоштар ҙа, һелкенер япраҡ та ҡалмаған.**

Ҡышҡылыҡҡа май запасы туплап, кәүҙәһе ауырайған урман хужаһы айыу йоҡларға әҙерләнә был ваҡыт. Кеше аяҡ баҫмаған төпкөл, аулаҡ урындан үҙенә өң хәстәрләй йә былтырғы ятағын тәртипкә килтерә: ятыр урынына ылыҫ ботаҡтары, мүк, бесән түшәй. Ҡышҡы урманда астан үлмәҫ өсөн тәбиғәт уларҙы ана шулай ҡурсылай. Ғөмүмән, айыуҙың йоҡоға талыуы - үҙе бер ҡыҙыҡлы күренеш. 4-5 ай, ҡыш оҙаҡҡа һуҙылған ҡайһы бер географик киңлектәрҙә ярты йылға тиклем өңөндә ҡышлаусы был хайуандың ашамай-эсмәй, ҡалдыҡ продукт бүлмәй йоҡлауы ғилми телдә "анабиоз" күренеше тип атала, йәғни, организм эшмәкәрлегенең һүлпәнәйеүен (матдәләр алмашыныуы, тән температураһы, пульс һ.б.) аңлата. Ҡышты йоҡлап үткәреүсе бурһыҡ, янут, һыуһар кеүек башҡа ваҡ йәнлектәр шулай уҡ алдан хәстәрләгән өңдәренә инеп ята. Ҡуян да ҡышҡа яраҡлаша: тунын аҡҡа алыштыра - тәбиғәт уны ла йыртҡыс хайуандарҙан ана шулай һаҡларға тырыша. Ғөмүмән, ҡыр йәнлектәре өсөн ауыр миҙгел етә: аҙыҡ табыуы ауырлаша. Быйылғы урман янғындарынан һуң - айырыуса.

Нисек кенә булмаһын, тәбиғәт барыбер үҙ асылына тоғро ҡала: киреһе лә, ыңғайы ла уның сиратлашып килә һәм был илаһи, бөйөк хәрәкәтте - көн, ай, йыл ағышын үҙгәртеү, кемдер теләгәнсә һулға йә уңға бороп ебәреү мөмкин түгел, ә фәҡәт тәбиғи процестарҙы боҙорға, бутарға ғына мөмкин. Уйланып, бешеп етмәгән берәй "идея" менән, мәҫәлән. Бәғзе берәүҙең шәхси ихтыяры буйынса был айҙағы халыҡ байрамы - Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы көнөн **(7)** ҡыҙыл дата иҫәбенән алып ташлап, ябай көн итеп ҡалдырған кеүек. Дөрөҫ, был хәҙер инде иҫке яра, уны соҡоп тороуҙың кәрәге лә юҡтыр: күптәр өсөн ул, үкенескә, "буш урын"ға әүерелә бара. Бынан 104 йыл элек бөтөн донъяны дер һелкеткән, кешелек тарихында бер һәм берәгәй революция, әйтерһең дә, бөтөнләй булмаған... Ләкин Еребеҙ тарихында тиңе юҡ планета ваҡиғаһы бынан ғына үҙенең тарихи әһәмиәтен юғалтмай, сөнки уны тарих биттәренән йыртып ташлап булмай. Әлегә ул өлкән быуын хәтерендә яҡты иҫтәлектәр булып һаҡлана, ләкин баяғы "осраҡлы ихтыяр" арҡаһында йәштәр аңынан революция тарихы мәңгелеккә юйылды. Бөгөн берәй йәш кешенән йә уҡыусы баланан "Кем ул Ленин?" тип һораһаң, "яҙыусы" йәки "космонавт" тигән яуапты ишетеүең бик ихтимал.

Хәҡиҡәт - бала телендә, тиҙәр. Эйе, Ленин "яҙыусы" ла булған. Ер йөҙөндә социаль ғәҙеллек тантана итһен өсөн том-том ғилми хеҙмәттәре һәм бойомға ашырылып өлгөрмәгән, шул арҡала кемдәрҙеңдер ихтыяры менән уңға ла, һулға ла бороп ебәрелгән һәм ахыр сиктә "дөрөҫ булмаған" мөһөрө һуғылған бөйөк гуманистик теорияһы ҡалды... Эйе, ул бөгөнгө бала теле менән әйткәндә, "космонавҡа" ла тиң булды. Ер йөҙө тарихында тәүге тапҡыр иҙелеүсе ябай халыҡты иҙеүсе аҡса тоҡсайҙары ҡоллоғонан азат итеп, фәҡирлек сигендә михнәт сиккән капитал ҡорбандары ҡулына уртаҡ ил байлығын тартып алып бирҙе; ерле, эшле, бәхетле итте. Ә ҡайҙа бөгөн революция байрамын алыштырған "Халыҡтар берҙәмлеге" **(4)** тантанаһы? Сит-ситтәре БДБ-ға бүлгеләнеп, уларының да ҡайһылары "өлкән ағаһына" оторо торҙо һәм Украина, Грузия, Молдавия ишеләре Рәсәй өсөн ҡан дошманға әйләнде. Ә "Халыҡтар берҙәмлеге"нең ҡалған яртыһы - әҙәм "аҡылы" ҡорбаны - үлемесле вирустан вакцинация

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Төрлө илдәрҙә төрлө ваҡытта Олатайҙар һәм өләсәйҙәр көнө үткәрелә, ә беҙҙә уларҙың байрамы октябрь аҙағына тура килә. Үҙегеҙҙең олатай-өләсәйлек вазифағыҙ тураһында һөйләгеҙ әле...***

***Рима СӘЛИМОВА, Ейәнсура районы:*** Өләсәйлек вазифамды иң беренсе ейәндәремде туған телдә һөйләшергә өйрәтеүҙә күрәм. Баш ҡалала йәшәй улар. Балалар баҡсаһына барғансы өйҙә тик башҡортса ғына һөйләштеләр. Урысса белмәгәс, унда тиҫтерҙәре менән аралашыуы, аңлашыуы ауырға тура килер инде, тип борсолғайныҡ хатта. Әммә бер-ике ай йөрөгәйнеләр, әсә телен онотторлар ҙа ҡуйҙылар. Әсә-атаһы тәүҙә өйҙә тик башҡортса ғына һөйләшергә тигән талап ҡуйған булғайны ла, фәтүәһе булманы. Мин үҙем дә эшләгәс, ауылға йыш ҡалдырып китә алманылар. Ял, байрам көндәрендә ҡайтҡан арала ғына улар менән һөйләшеп, әңгәмәләшеп ултырырға ваҡыт ҡалмай торғайны.

Хәҙер хаҡлы ялдамын. Аҙналап ҡалдырып та китәләр, үҙем дә оҙаҡҡа Өфөгә барып ятам. Тәүҙә мине бәләкәйе урыҫсаға, ҙуры, мәктәптә уҡып йөрөгәне инглиз теленә өйрәтеп маташты. Улар оло ағай телендә бер нәмә әйтһә, аңламамыш булам. "Белмәйем, аңламайым", - тип ҡырталашам. Хатта ысынтылап үсегеп йөрөгән ваҡыттарым да булды. Әсә-атаһына инде. Балалары ыңғайына өйҙә урыҫса һупалап йөрөгәндәренә асыуым килә ине.

Улымдың мәктәптә уҡыған ваҡытта нисек башҡорт телен, әҙәбиәтен, тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеүен иҫенә төшөрәм. Башҡа милләт малайҙары менән телебеҙгә, халҡыбыҙҙың Салауат Юлаев, Шәйехзада Бабич, Муса Мортазин кеүек арҙаҡлы шәхестәренә ҡағылышлы мыҫҡыллы, кәмһетеүле ҡараштарына риза булмай, һуғышып, ҡайһы берҙә "туҡмаҡ" ашап ҡайтҡан саҡтарын һөйләйем. Балаларың үҙеңдең телеңдә һөйләшмәй икән, һинең үҫмер сағыңда яулашып, һуғышып, көрәшеп йөрөүеңдән ни файҙа, тип, оялтҡан саҡтар ҙа булды. Ваҡыт юҡ бит, тип аҡланған була килен дә. Сәй эскәндә, ашарға бешергәндә, дәрес әҙерләгәндә, йоҡларға ятҡанда, балалар баҡсаһына йәки мәктәпкә барғанда үҙ телеңдә һөйләшеү өсөн ниндәй ваҡыт кәрәк! Бер ниндәй ваҡыт та, аҡса ла кәрәкмәй.

Быйыл йәйге каникулда икеһе лә минең янда ауылда булды. Бер аҙна тигәндә "Хәйерле иртә!" тип килеп торҙолар былар. Бер ниндәй акцентһыҙ-ниһеҙ һөйләште лә киттеләр. Өйҙә тик башҡортса тапшырыуҙар ҡаранылар, "Юлдаш"ты тыңланылар. Урамда тиҫтерҙәре менән уйнап ҡайтҡас, һөйләп көлгән булалар: "Үҙҙәре ауылда йәшәй, ә башҡортса белмәйҙәр", - тип.

Һөйләшергә генә түгел, ә халҡыбыҙҙың тарихына ла ҡыҙыҡһыныу уятырға тырышам. Сөнки туған теле менән, халҡы, милләте менән ғорурланһын өсөн данлы үткәнебеҙҙе белергә тейеш, тип уйлайым. Ошо тойғо булһа, улар бер ҡасан да үҙ телендә һөйләшергә оялмаясаҡ.

Һәр әсәй-атай, өләсәй-олатай балаһы тәрбиәле, иманлы, әҙәпле булып үҫеүен теләй. Бөгөнгө тиҙ үҙгәреп торған, мәғлүмәт технологиялары нығ үҫешкән заманда быға тик бер юл менән өлгәшеп була. Ул да булһа - милли һәм дини йолалар. Ниндәй генә заман килмәһен, ниндәй генә реформалар булмаһын, үҙебеҙҙең милли йолаларға һәм дингә таяныу ҡамасауламай. Быны шул йолаларҙы көнделдәренә һеңдереүҙе үҙемдең төп өләсәйлек бурысым, тип һанайым. Телебеҙгә, халыҡ ижадына, йыр-моңобоҙға, тарихыбыҙға беҙ, өләсәй-олатайҙар, һөйөү, ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләмәһәк, кем тәрбиәләр. Ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙең ата-әсәһе бер түгел, икешәр урында эшләйҙәр бит...

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓29 октябргә мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 670 сир йоҡтороу осрағы раҫланған. Коронавирус осраҡтарының дөйөм һаны 84 825-кә еткән. Тәүлек эсендә вафат булғандар 35-кә артҡан, хәҙер улар - 2 550 кеше. Бөтәһе 73 972 кеше һауыҡҡан, 639-ы - һуңғы тәүлектә.

✓БР Башлығы Радий Хәбиров төбәк биләмәһендә коронавируслы инфекцияға ҡаршы оператив штаб ултырышын уҙғарҙы. Төбәк оперштабы 30 октябрҙән 7 ноябргә тиклем иғлан ителгәндән тыш, республикала тағы өҫтәмә ял көндәре индерелмәйәсәк, тип белдерҙе. Вице-премьер - БР һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин белдереүенсә, республикала COVID-19 менән ауырыу ситуацияһы ауыр булһа ла тотороҡло килә. Вакциналау темптары яйлап арта, уның буйынса Башҡортостан илдә алдынғы биш төбәк араһына ингән.

✓Башҡортостан парламенты ултырышында БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары кандидаттары өсөн тауыш биреү уҙҙы. Күпселек тауыш менән Мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте һәм спорт буйынса комитет ағзаһы Тамара Танһыҡҡужина һайланды. "Республика халҡы Тамара Михайловнаны лайыҡлы спорт ҡаҙаныштары, Башҡортостан Йәмәғәт палатаһының өс составындағы әүҙем эше, ҡыҙыҡлы социаль проекттары аша яҡшы белә. Тамара Танһыҡҡужина үҙенең дисциплинаһы, ныҡышмалылыҡ, стресҡа ҡаршы тора алыу һәм ярҙамсыл булыу кеүек шәхес сифаттары менән билдәлелек ҡаҙанды",- тип үҙ фекерен белдерҙе Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев.

✓Башҡортостанда инфекция койка-урындарының 13 проценты буш, тип белдерә БР һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин. Әлеге ваҡытта республика буйынса барлығы 8155 инфекцион койка-урын бар. 13 процент - яҡынса меңдән ашыу тигән һүҙ. "Бындай запас беҙгә Өфөлә лә, район-ара һәм район инфекцион үҙәктәрҙә граждандарҙы ваҡытында госпитализациялау мөмкинлеге бирә", - ти министр. Шулай уҡ ул Башҡортостандың яңы тажзәхмәт сире менән сирләүселәр һаны буйынса илдә 81-се урында тороуын да белдерә.

✓Ноябрҙә Рәсәйҙә ҡарабойҙай, һоло ярмаларының хаҡы 10-20 процентҡа ҡыйбатлана. Сәбәбе - ярмаларҙы төрөү һәм ҡаптарға тултырыу хаҡының артыуы. Әлбиттә, ҡайһы бер төбәктә ҡоролоҡ сәбәпле, уңыш та насар булған. Ә төрөү материалының (айырыуса полипропилен һәм картон) хаҡы һуңғы йылда хатта 100 процентҡа күтәрелгән. Шуға тауар ҙа ҡимmәтләнә.

кампанияһында ла бит хатта берҙәмлек сағылышы булыуҙан алыҫ тора. Ә коронавирус эпидемияһы - шул уҡ дошман, шул уҡ интервент. Уға ҡаршы көрәштә дауалау-санитар саралар менән бер рәттән, халыҡтың социаль аң кимәле, тәртибе лә мөһим роль уйнай. Йәғни тап бына ошондай мәлдәрҙә кәрәк тә инде ул халыҡтар берҙәмлеге! **4 ноябрь**, шулай итеп, эш кешеһе өсөн графиктан тыш бер көн ял буларак ҡына ҡәнәғәтләндерә күптәрҙе.

Ғөмүмән, календарь биттәрендә генә билдәләнеп, йәшәйешебеҙҙә бер ниндәй сағылыш тапмаған "күренекле" даталар байтаҡ ул ҡағыҙҙа. "Сифат көнө" **(11)**, мәҫәлән. Йәки "Халыҡ-ара толерантлыҡ көнө" **(16)**. Әйткәндәй, бына ошо һуңғыһы хаҡында бер кәлимә. Толерантлыҡ көнө халыҡ-ара кимәлдә билдәләнә. Сит ил йәмғиәтендә был төшөнсә, нигеҙҙә, бер яҡлыраҡ ҡабул ителә һәм гомосексуализм менән бер енестәгеләр никахына түҙемлек күрһәтеүҙән ары китмәй, ахырыһы. Беҙҙә быңдай ғибрәттәргә иммунитет һаҡланһа ла (шөкөр!), ижтимағи-сәйәси өлкәлә толерантлыҡ тигән нәмә әллә ни һанға һуғылмай. БМО тарафынан ҡабул ителгән (1995 йыл) "Толерантлыҡ принциптары декларацияһы" буйынса, толерантлыҡ (урыҫса - терпимость, башҡортса - түҙемлек, дөрөҫөрәге, бәлки, сабырлыҡ күрһәтеү) термины башҡалар фекеренә, тормош рәүешенә, ҡылыҡ һәм йолаларына түҙем, сабыр булыуҙы аңлата. Был әҙәп сифаты айырыуса төрлө халыҡтар, милләттәр һәм уларҙың мәҙәниәте, диненә ҡарата түҙем, ихтирамлы мөнәсәбәттә булыуҙы талап итә. Үкенескә, тормошта йыш ҡына бының киреһен күҙәтергә тура килә. Үҙ фекерен әйткән, башҡалар менән бер төрлө уйламаған, ҡайһы бер ижтимағи-сәйәси темаларға үҙ ҡарашы булғандарҙы ултыртып ҡуйырға ла, "сит ил агенты" ҡушаматы сәпәргә лә күп һорамаҫтар бөгөн, юғиһә...

Был айҙа матур, күңелле, йөрәккә яҡын көндәр күберәк, бәхеткә. Был байрамдарҙың нурын болотло-яуынлы һауа торошо ла, коронавирус эпидемияһы хәүефе лә ҡамшай алмаҫ. Ҡырпағайҙы тотошлайы менән ғаилә айы тип атарға ла булыр ине: Халыҡ-ара ирҙәр **(19)**, Бөтөн донъя бала **(20)**, Уландар **(22)** һәм Әсә **(28)** көндәре биҙәй ноябрь календарын. Иманым камил: был көндәр ҡағыҙҙа ғына ҡалмаҫ, ә матур, татыу, ихлас ғаиләләребеҙ күрке булып, уның иң түренә инеп ҡунаҡлар, тик имен-аман, иҫән-һауҙар булайыҡ, сир-зәхмәткә бирешмәйек, Аллаһ беҙҙе ярҙамынан ташламаһын!

Быларҙан тыш, Халыҡ-ара Шаяндар һәм зирәктәр клубы (КВН) көнө **(8 ноябрь)**, Фашизм, расизм һәм антисемитизмға ҡаршы халыҡ-ара көн, Халыҡ-ара ядро ҡоралына ҡаршы акция **(9)**, РФ Эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре, Тыныслыҡ һәм үҫеш өсөн бөтөн донъя фән көнө **(10)**, Изгелек **(13)**, Бөтөн донъя диабетҡа ҡаршы **(14)**, Бөтөн Рәсәй армияға саҡырылыусылар **(15)** көндәре, Участковый, Халыҡ-ара студенттар **(17)** көндәре, Ҡыш бабайҙың тыуған көнө, Халыҡ-ара тәмәкенән баш тартыу **(18)**, Бөтөн донъя юл һәләкәттәре ҡорбандарын иҫкә алыу **(21)**, Бөтөн донъя сәләмләүҙәр, Бөтөн донъя телевидение **(21)**, "Морж"дар **(24)**, Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙға көс ҡулланыуға ҡаршы көрәш **(25)**, Халыҡ-ара мәғлүмәт **(26)**, Бөтөн донъя йорт хайуандары, Халыҡ-ара мәғлүмәтте яҡлау көндәре **(30)** билдәләнә.

**Ҡырпағайҙа тыуғандар:**

**1 -** Башҡортостандың халыҡ артисы, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының һүҙ жанры оҫтаһы, филология фәндәре кандидаты **Вәлит ИЛЕМБӘТОВҡа - 65 йәш** (1956).

**2 -** прозаик, драматург, БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы **Мөҙәрис БАГАЕВҡа - 70 йәш** (1951).

**7 -** драматург, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, I, II дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл йондоҙ, Дуҫлыҡ һәм Салауат Юлаев ордендары кавалеры **Нәжиб АСАНБАЙҙың** (Николай Асанбаев) тыуыуына **- 100 йыл** (1921-2013).

**7 -** прозаик, йәмәғәт эшмәкәре, тарихсы һәм йырауса **Спартак ИЛЬЯСОВҡа** - 80 йәш (1941).

**15 -** 1952-1973 йылдарҙа Ф.Ғәскәров исемендәге Башҡорт дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле бейеүсеһе, БАССР-ҙың халыҡ артисы, "Байыҡ" башҡорт бейеүҙәре республика телевизион конкурс-фестивален ойоштороусыларҙың береһе **Ратмир БӘҘРЕТДИНОВтың тыуыуына - 90 йыл** (1931-2020).

**17 -** журналист, философия фәндәре кандидаты, БР "Башҡорт энциклопедияһы" ғилми-нәшриәт комплексының генераль директоры, "Почет билдәһе" ордены кавалеры, техника һәм фән өлкәһендә Дәүләт премияһы лауреаты **Уйылдан СӘЙЕТОВҡа - 70 йәш** (1951).

**22 -** ғалим-әҙип, БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы, филология фәндәре докторы, БДУ профессоры, Халыҡ-ара төрки академияһы академигы, РФ Юғары һөнәри белем биреү буйынса почетлы хеҙмәткәр, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Ғиниәтулла ҠУНАФИНға - 75 йәш** (1946).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Төрлө илдәрҙә төрлө ваҡытта Өлатайҙар һәм өләсәйҙәр көнө үткәрелә, ә беҙҙә уларҙың байрамы октябрь аҙағына тура килә. Үҙегеҙҙең олатай-өләсәйлек вазифағыҙ тураһында һөйләгеҙ әле...***

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Көйөргәҙе районы:*** Һәр ир үҙ ғүмерендә уға ғына билдәле, тик ул ғына аңлаған мәҙҙәт үткәрә - тәүҙә атай булыу бәхете, һуңынан - олатай вазифаһы. Атайлыҡты, кемдер уйлауынса, үҙең өсөн йәшәгән саҡта, икенсеһен, олатайлыҡты, бай тәжрибә туплап, оло тормош юлын уҙғарғас кисерә. Улар араһында ябай ғына 25-30 йыл ғүмер ята кеүек. Йәш саҡта ҡайҙалыр барырға, кем менәндер осрашырға кәрәк. Йыш ҡына баланды үҙең менән алыу мөмкинлеге лә булмай. Бына шул саҡта эргәлә олатай-өләсәйҙәре булһа, бик тә һәйбәт инде. Ейән-ейәнсәрҙәр һәм өләсәй-олатайҙар бәйләнеше, оло быуындың тәрбиә мәктәбе емештәре шул саҡта һалына инде.

Тәрбиә мәктәбенең тәүге талабы, әлбиттә, йәш быуынды тыуған телгә, тыуған мәҙәниәткә ылыҡтырыу. Минең атай-әсәй ҡаланан алыҫ булмағас, балаларым май айы тамамланмай, шунда юллана торғайны. Августың һуңғы көнөндә ҡояшҡа янып, ауыл балаһына әйләнеп, бөтмәҫ тәьҫораттар менән ҡайтып төшә ине. Ҡыҫҡаһы, тик ыңғай яҡтарҙан торған күренеш ул олатай-өләсәйле булып үҫеү. Быны тик шул балалар ғына аңлайҙыр. Мәҫәлән, үҙемдең бер олатайым һуғыштан яраланып ҡайтып, һауыға алмай вафат булған, икенсеһе беҙҙең урамда йәшәне. Уларға йыш бара торғайным, олатайым минән берәр шиғыр һөйләтмәй түргә үткәрмәй ине, шуға күрәлер, шиғыр уҡырға ла, һөйләргә лә яратам. Унан башҡа ғәмәлдәрҙе, бигерәк тә тыуған телемә һөйөүҙе, халҡымдың тарихына ҡыҙыҡһыныуҙы ла үҙләштергәнмендер, тим.

Ысынлап та, өләсәй-олатай өсөн ейән-ейәнсәрҙәрҙең уларҙың тәжрибә мәктәбе һабаҡтарын ҡабул итеүе, ҡыҙыҡһыныуы бик тә мөһим. Бына беҙҙең дә ейән-ейәнсәрҙәр байтаҡ, әммә ауылды үҙ итеп, ял һайын киләм тип торғаны берәү генә. Ике йәшкә тиклем быны үҙебеҙ ҙә бик уйлап барманыҡ, йәнәһе, ул ауыл тормошон үҙ итмәҫ. Хата уйлағанныбыҙҙы өләсәһе, ейәнебеҙ һәм мин, өсәү генә, ауылдағы йортобоҙ биләмәһенә аяҡ баҫҡас та аңланыҡ. Тәүге секундтан уҡ ул аяҡ кейемен сисеп, үләндә йүгерә башланы. Йәйләп ул малайлығын аса башланы. Ғаражға ингән һайын сүкеш, ҡаҙау, төрлө асҡыстар алып сыға һәм, иң мөһиме, уларҙы дөрөҫ ҡуллана. Шуныһы аптырата ине - бер ваҡытта ла балта менән ҡыҙыҡһынманы. Уның ни тиклем ҡурҡыныс инструмент икәнен бала аҡылы булһа ла аңлағандыр. Бер ножовка, сүкеш, төрлө ҙурлыҡтағы шөрөп, таҡта биреп ҡуйҙым үҙенә. Өйөндә ҡаҙау ҡаға белмәгән ир-егетҡә аптырамай булмай. Нисек инде, ир затынан булып, ҡулына сүкеш тә тота белмәйһең! Шуға күрә ейәнебеҙ бала саҡтан ысын ир булып үҫһен, тип, инструменттар биреп ҡуйҙым үҙенә. Ҡалаға ҡайтҡас, әсәһенә "Олатай миңә ысын инструменттар бирҙе", тип маҡтанған. Беҙ балаларға уйынсыҡ бирәбеҙ, ә улар, ана, ысынға иҫе китә, ғорурлана.

Шул уҡ йәйҙә иртән иртүк прогулкаға йөрөргә ғәҙәтләндек. Торғас та йылға буйына төшәбеҙ, һуңынан ҡоҙоҡ яғына барып, туғайҙы, унда осҡан ҡоштарҙы барлайбыҙ. Мәләүеҙ йылғаһы аша һалынған күперҙе сығып, тау башында урынлашҡан ауылды, унда барған тормошто күҙәтәбеҙ. Шулай итеп, ҡунаҡҡа килгән ейәнебеҙҙе йәки ул мине, иртән прогулкаға йөрөтә инем. Йәйҙең ғүмере ҡыҫҡа булды, ул нисек килде, шулай үтеп тә китте. Киләһе йәй килгәс шуны-шуны эшләрбеҙ, тип планлаштырһам, ул ҡыш та ял һайын ашҡынып килде, "ысын" инструменттар менән өйҙә лә эшләне. Олатай менән бергә үҙләштергән һөнәрҙәре байтаҡ, уларын һанап тормайым. Шул шатландыра: ул башҡа балалар кеүек, телевизорға, гаджеттарға текәлеп, өйҙә ултырмай, һәр саҡ урамда, минең янда, хәрәкәт иткән уйындарға өҫтөнлөк бирә. Һуңғы осорҙа телевизорҙан хоккей, футбол, баскетбол ҡарарға өйрәнеп алды. Ул - "Салауат Юлаев" хоккей командаһының тоғро көйөрмәне. Йәш хоккеист Родион Әмировты беҙҙең тыуған тип иҫәпләй. Әле футбол буйынса донъя чемпионаты башланыуын түҙемһеҙлек менән көтә. Сәғәттәр буйы телефонда, компьютерҙа теләһә ниндәй мәғәнәһеҙ уйындар менән маташҡансы, ошолай ҙур спорт менән ҡыҙыҡһынып, хәбәрҙәр булып үҫеүе шатландыра, олатай ҡыҙыҡһынған әйберҙәр менән ҡыҙыҡһыныуы мине шул тиклем бәхетле итә.

Үҙем белгәнде өйрәтергә, тапшырырға кеше булыуы менән шатмын, тимәк, йыйған тормош тәжрибәм юғалып ҡалмаясаҡ.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре йыл башынан 11 меңдән ашыу иҫерек водителде тотҡан. Был хаҡта оператив кәңәшмәлә БР транспорт һәм юл хужалығы министры Александр Будушев белдерҙе. Октябрҙең 18-енән 24-енә тиклем арауыҡта алкоголь ҡулланғандан һуң тотолған водителдәр һаны 245 кеше булған, шул иҫәптән уларҙың 6-һы - юл-транспорт ваҡиғаһына сәбәпсе. Йыл башынан эсеп авария яһаусылар һаны - 171 кеше.

✓"Торатау" геопаркы тураһында фәнни комикстар китабы донъя күрҙе. Ул Мәскәү нәшриәтендә 850 данала баҫылған. Йыйынтыҡта Ер планетаһының барлыҡҡа килеүе һәм бөгөнгө торошо, "Торатау" геопаркы биләмәһендә урынлашҡан 50-гә яҡын мәмерйә тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр урын алған. Унда экологик мәҙәниәткә лә етди иғтибар бүленгән. "Торатау" геопаркы вәкиле Екатерина Кириллова әйтеүенсә, комикстар форматы балаларға фәнни мәғлүмәттәрҙе еңел үҙләштерергә ярҙам итә.

✓Ҡош кизеүе вирусы осрағы тәүге булып теркәлгән Туймазы районында 10 меңдән ашыу ҡош-ҡорт яндырылған, тип белдерҙе республиканың Ветеринария идаралығы начальнигы Азат Йыһаншин. Уның әйтеүенсә, вирус ҡоштарға ем, һыу аша күсә, шулай уҡ улар инфекциялы ҡырағай ҡоштар менән бер һыу ятҡылығында булһа, ауырыу йоҡтора. Инструкцияға ярашлы, ҡош кизеүе асыҡланған бөтә хужалыҡтарҙағы ҡоштар юҡ ителергә тейеш. Әле лә Силәбе, Ырымбур өлкәләренән вирус үтеп инеү хәүефе ҙур. Шуға күрә ветеринарҙар оҙаҡҡа һуҙмай, шәхси ихаталағы өйрәкҡаҙҙарҙы һуйып ҡалырға ашыҡтыра.

✓Һалым органдары халыҡҡа 2020 йыл өсөн транспорт, ер һәм милек һалымы түләүгә квитанциялар ебәрә башланы. Түләү ҡағыҙҙары заказлы хат менән килә. Уларҙы шулай уҡ шәхси кабинетта электрон форматта алырға мөмкин. Республика халҡы һалымдарҙы түбәктәге 1 280 почта бүлексәһендә йәки өйгә килгән хат таратыусы аша түләй ала. Заказлы хаттарҙы хат таратыусылар адресаттарҙың ҡулына тапшыра. Һалымдарҙы хат таратыусының мобиль терминалынан йәки почта бүлексәһендә шунда уҡ түләргә мөмкин.

✓Башҡортостанда быйыл планға ярашлы ремонтланырға тейешле бөтә подъездар ремонтланды. Быйыл подъездарҙы комплекслы ремонтлау өсөн 222 миллион һум бүленде. Республиканың өс муниципалитетында урынлашҡан 113 күп фатирлы йортта 308 подъезд тәртипкә килтерелде.

ҠЫҪҠАСА

# ТӨНДӘ ГЕНӘ...

✓ **Ил Президенты Владимир Путин субъекттар башлыҡтарына йәмәғәт туҡланыуы ойошмаларының эшен - төнгөлөккә һәм күп кеше ҡатнашҡан күңел асыу сараларын төнгө 11-ҙән иртәнге 6-ға тиклем туҡтатырға тәҡдим итте.** Шулай уҡ губернаторҙар һәм предприятиелар етәкселәре вакцинация яһатыу өсөн хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы һаҡланған ике ял көнө биреүҙе лә тәьмин итергә тейеш. Хроник сирҙәре булған 60 йәштән өлкән хеҙмәткәрҙәрҙе өйҙән эшләү режимына күсерелә. Тажзәхмәт ауырыуына ҡаршы вакцина алмаған 60 йәштән өлкәндәргә үҙкүрсәланыуға китергә тәҡдим ителә. Айырым ойошмаларға граждандар вакцинация йәки сирҙе үткәреү тураһындағы документтар буйынса ғына индерелә, бындай учреждениелар исемлеген субъект властары үҙҙәре төҙөй.

✓ **Республикала дауахананан тыш үпкә сире (пневмония) менән сирләүселәр һаны 12,4 процентҡа кәмегән.** Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина белдереүенсә, лаборатор диагностика буйынса был сирҙе төп ҡуҙғытыусы булып COVID-19 вирусы (57 процент), бактериаль патогендар (36 процент), миксинфекциялар (3,5 процент), стафилококктар (2,8 процент) тора. Киҫкен респиратор вирусы инфекция (ОРВИ) менән сирләү кимәле эпидемиолог сиктән артып киткән. Уҙған аҙнала республикала 37455 ОРВИ (30 проценты 14 йәшкә тиклемге балалар тәшкил итә) осрағы теркәлгән. Был һан аҙна эсендә 0,4 процентҡа артҡан. "Белем биреү ойошмаларында COVID-19 менән сирләү осраҡтары асыҡланыуға бәйле, эпидемияға ҡаршы һәм профилактика саралары комплексы үткәрелә. 22 октябрҙән 262 мәктәптә (дөйөм һандан 5 процент) айырым класстарҙа сикләү индерелгән", - ти Галина Пермина.

✓ **Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы бер үк ваҡытта ковидҡа һәм киҙеүгә ҡаршы прививка эшләтеүгә рөхсәт бирҙе.** "Гам-Ковид-Вак" ("Спутник V") вакцинаһын медицина ҡулланыуы буйынса инструкцияға шундай үҙгәртеү индерелгән. "Спутник V" вакцинаһының киҙеүҙе профилактикалау буйынса вакцина менән мөнәсәбәте тикшерелгән һәм уларҙы бер үк ваҡытта ҡулланғанда имуногенлыҡтары кәмемәүе асыҡланған. Был прививкаларҙы бер үк ваҡытта эшләткәндә улар тәндең төрлө өлөшөнә ҡаҙала, мәҫәлән, уң һәм һул ҡулбашҡа. Ковид һәм киҙеүҙең етди эпидкүтәрелеше ваҡытында граждандарҙың үҙен һаҡлауы мөһим, ти табиптар. Был ололарға ғына түгел, йәштәргә лә ҡағыла, сөнки улар ҙа хәүеф төркөмөндә тора. Бер үк ваҡытта ике сиргә ҡаршы вакцина эшләтеүҙе быға тиклем Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы ла хуплағайны.

✓ **Башҡортостанда биш йыл дауамында инвалид балалар һаны артыуы күҙәтелә.** Был хаҡта Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова белдерҙе. Уның әйтеүенсә, быйыл республикала инвалид балалар һаны 18,1 мең тәшкил итә. 2017 йылда был һан 15,4 мең, 2018 йылда - 16,3 мең, 2019 йылда - 16,8 мең булһа, былтыр 17,5 мең ине. Өлкән инвалидтар һаны бынан алдағы йылдарға ҡарағанда кәмегән. 2019 йылда өлкән инвалидтар һаны 270,7 мең, 2020 йылда 248,4 мең булһа, быйыл республика буйынса һаулыҡ мөмкинлектәре сикләр һаны бөтәһе 241,6 мең кеше тәшкил итә. Министр билдәләүенсә, балалар араһында инвалидтарҙың артыуы илдә генә түгел, тотош донъя кимәлендә күҙәтелә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БИНА - ЙӘШТӘРГӘ




**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Йәштәр йортонда булды. Ул "Йәшләр House" ижади майҙансыҡты асыуҙа ҡатнашты һәм йәштәрҙең төрлө йәмәғәт ойошмалары активистары менән осрашты.**

2020 йылдың июнендә Йәштәр көнөнә арналған "Беҙ бергә" фестивалендә Башҡортостан Башлығы был объектты урынлаштырыу өсөн Өфөнөң тарихи үҙәгендә, Пушкин урамы, 86 адресы буйынса бина һайлауҙары тураһында хәбәр иткәйне. Быға тиклем унда Башҡортостан таможняһы ине. Республика буйынса Дәүләт йәштәр комитеты рәйесе Яна Гайдук билдәләүенсә, бинаның майҙаны 1,5 мең квадрат метрҙан күберәк. Унда йәмәғәт ойошмалары, төбәк ирекмәндәр штабы, киберспорт майҙансығы, инициатив төркөмдәр өсөн коворкинг урынлашасаҡ.

Башҡортостан Башлығы Йәштәр йорто бинаһын һәм офистарҙы ҡараны, "Аврора" таланттарҙы үҫтереү үҙәге вәкиллегендә, "Лиза Алерт" ойошмаһында, "Юнармия" йәмәғәт хәрәкәтендә булды, йәштәр берләшмәләре әүҙемселәре менән аралашты, яңы бинала эш һәм ижад итеү шарттары менән ҡыҙыҡһынды, республиканың йәштәр хәрәкәттәре лидерҙары менән осрашты һәм уларҙы борсоған һорауҙар буйынса фекер алышты. "Бер йыл элек ошо бинаны йәштәргә бирергә ҡарар иттек, сөнки был - киләсәккә ысын инвестиция, - тине төбәк етәксеһе, осрашыуҙы асып. - Хәҙер барыһы ла һеҙҙән тора. Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты эште иртәнән алып кискә тиклем тормош ҡайнап торорлоҡ итеп ойоштороға тейеш. Бындағы һәр хәрәкәт артында бөтә республика буйынса мендәрсә кеше тороуын иҫәпкә алғанда, ошондай уҡ үҙәктәрҙе Башҡортостандың башҡа ҙур ҡалаларында ла асыу мөһим".

Һөйләшеү барышында йәштәрҙән төрлө тәҡдимдәр, фекерҙәр яңғыраны. Өфө КВН-ы һәм башҡа ижади берекмәләр вәкилдәре Йәштәр йортоноң подвалын төҙөкләндерергә, Йәштәр сәйәсәте лигаһы вәкиле Башҡортостан йәштәре башланғыстарына грант ярҙамы күләмен арттырырға тәҡдим итте. Ҡайһы бер берекмәләр ҙур форумдар үткәреүҙә ярҙам һораны. Республика Башлығы Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитетына был башланғыстарҙы иғтибар менән өйрәнергә, тормошҡа ашырыу юлдарын күҙалларға ҡушты. Шул уҡ ваҡытта ул коронавирусҡа бәйле ябай булмаған хәл тураһында иҫкә алды һәм күп кеше ҡатнашҡан сараларҙы коллектив иммунитет булғансы сикләргә йәки икенсе ваҡытҡа күсерергә тәҡдим итте.

# КИЛӘСӘКТӘ ЛӘ ХЕҘМӘТ ИТЕР



**Башҡортостанда ошо арала тағы ла ике инфекцион госпиталь төҙөү урыны хәл ителәсәк. Был хаҡта Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Премьер-министр Андрей Назаров белдерҙе.**

Октябрьский ҡалаһында һәм Сибайҙа ковид-госпиталдәр төҙөү тураһында Әбйәлил районының Дауыт ауылы халҡы менән аралашҡанда республика Башлығы Радий Хәбиров белдергәйне. "Тажзәхмәт сирен һөҙөмтәле дауалау һәм шул уҡ ваҡытта башҡа сирҙәрҙе дауалауҙы кәметмәү өсөн беҙгә тағы ла ике ковид-госпиталь төҙөргә кәрәклеген аңланыҡ. Коронавирус үткәс, был учреждениелар күп профилле дауахана булып ҡаласаҡ. Бөгөн уларҙы тиҙерәк төҙөргә кәрәк", - тине Радий Фәрит улы. "Сибайҙа участка һайланған, тиҙ төҙөү өсөн мөмкинлектәр бар. Октябрьский ҡалаһында әлегә яраҡлы майҙан юҡ, шуға күрә агломерация өсөн Туймазы ҡалаһы эргәһендәге урын уңайлы буласаҡ. Был шаршамбыла объекттарҙы тиҙ арала төҙөү мөмкинлеген биргән конструкциялар ҡороу урындары раҫланасаҡ. Минфин менән финанс мөмкинлектәрен эҙләйбеҙ, улар бар. Аҙна һуңына төҙөлөш башланасаҡ", - тине Андрей Назаров. Һаулыҡ һаҡлау министрлығына буласаҡ госпиталдәрҙең коллективын тупларға ҡушылған. Бөгөн республикала Өфөлә һәм Стәрлетамаҡта ике ҙур инфекцион үҙәк эшләй. Был объекттар коронавирус эпидемияһы башланғас, тиҙ арала төҙөлөп, сафҡа индерелгәйне.

# КӨСЛӨ РУХЛЫЛАР ТӨЙӘГЕ



**Краснокама районының Аҡтанышбаш ауылында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының байрағы күсермәһен Әхмәтхужа Әхмәҙуллин исемендәге ауыл мәҙәниәте йортона тапшырыу тантанаһы үтте.**

Краснокама районында шайморатовсылар хөрмәтенә мемориаль таҡтаташ былтыр ошо ваҡытта асылған. Яңы Аҡтанышбаш ауылынан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан Әхмәтхужа Әхмәҙуллин менән Хәнәфи Нурғәлиев - 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының яугирҙары. Икеһе лә ошо ауылда тыуып үҫкән. Хәнәфи Нурғәлиев хөрмәтенә мемориаль таҡтаташ мәктәп бинаһына ҡуйылған. 2020 йылдың апреленән белем усағы уның исемен йөртә.

Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаев тантанағы сығышында: "Был ауылдың тарихы бик бай, бынан тыш, тарихи фактар көслө рухлы кешеләр йәшәүе тураһында һөйләй. Билдәле шәхестәребеҙҙең исемен район ғына түгел, республика кимәлендә лә күтәреүегеҙ һоҡландыра. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының даны Миңлеғәли Шайморатовтың Рәсәй Геройы ордены тыуған еренә ҡайтыуы менән яңы һулыш алды. Ә дивизияның батырлыҡ яугирҙарҙың ҡаһарманлығына бәйле. Дивизия ҡамауҙа ҡалғас, уның байрағын сығарыу - һеҙҙең яҡташтарығыҙ батырлығы. Ошо байраҡтың бөгөн ҡаһармандың тыуған төйәгенә ҡайтарылыуы - ҙур байрам", - тип билдәләне. Рәсәй Дәүләт Думаһының һигеҙенсе саҡырылыш депутаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айыткөлова йыйылыусыларҙы сәләмләп, шулай тине: "Бөгөн тарихи фактарҙың үҙгәртелеүе, икенсе юҫыҡта бирелеүе беҙҙе борсой. Үҫеп килгән быуынға дөрөҫ мәғлүмәт еткерергә тейешбеҙ. Уларҙың ғорурланып һөйләрлек кешеләре - эргәләрендә, ғаилә тарихында, шәжәрәһендә. Бөгөн тап шундай сараларҙың береһе. Беҙ үҙебеҙҙең ҡаһарман шәхестәребеҙ тураһында күберәк һөйләргә тейеш. Икенсеһе инде - архив менән эшләү, йәғни шәжәрә төҙөүгә ҡайтып ҡала".

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Баш ҡалала торлаҡ-коммуналь хужалығы хеҙмәттәре техникаһының ҡыш миҙгелендә эшләү буйынса әҙерлек комиссияһы смотры башланды. Йыл да ойошторолған был тикшереү ваҡытында махсус техниканың йыһазланыуы һәм водителдәрҙең әҙерлеге тикшерелә. Табылған етешһеҙлектәр тиҙ арала бөтөрөлә. Алдан баһалау буйынса бөтә предприятиелар ҙа әҙерлеккә етди ҡараған, ҙур комплекслы эш башҡарған.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте Ленин районында Солтанов, Чернышевский, Ғафури һәм Свердлов урамдары менән сиктәш биләмәне планировкалау һәм межалау проекттарын раҫланы. Биләмәнең дөйөм майҙаны - 8,37 гектар. Документҡа ярашлы, был участкала административ биналар, Юғары спорт оҫталығы мәктәбе, күп фатирлы йорттар урынлашҡан, яңы йорттар төҙөлә. Документта билдәләнеүенсә, ҡала мэрияһы Солтанов - Коммунистик - Свердлов - Ғафури кварталы үҙәгендәге участкала яңы балалар баҡсаһы ла төҙөргә йыйына. Шулай уҡ бассейн һәм ер аҫты паркингы менән фитнес-үҙәк төҙөү планлаштырыла.

✓Юл хеҙмәттәренең ҡыш миҙгелендә эшләүгә тулыһынса әҙерлеге 1 ноябргә көтөлә. Әле федераль юлдар 100 процентҡа (инфраструктура һәм техника), Өфө буйлап - 70 процентҡа (техника), республика юлдары - техника буйынса 77 процентҡа, инфраструктура буйынса 97 процентҡа әҙер. "Урал алды" автомобиль юлдары идаралығы подрядсылары федераль трассаларҙы эшкәртеү өсөн 20 мең тонна ҡом-тоҙ ҡатнашмаһы (талап ителгән күләмдән 74 процент), 22 мең тонна реагент (81 процент) әҙерләгән.

✓РФ Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының БР буйынса идаралығынан водителдәргә хәүефһеҙ тиҙлек режимында йөрөргә кәңәш итәләр. Унда шулай уҡ автомобилдең йәйге тәгәрмәстәрен ҡышҡы комплектҡа алмаштырыу кәрәклеге тураһында әйтелә. "Йәйәүлеләргә кейемдә яҡтылыҡты сағылдырыусы элементтар ҡулланыу кәрәклеге тураһында иҫкәртәбеҙ, уларҙы балаларығыҙ ҙа йөрөтһөн. Боҙлауыҡ мәлендә ҡолау һәм йәрәхәтләнеү хәүефе барлығын хәтерҙә тотоғоҙ, таймай торған табанлы аяҡ кейеме әҙерләгеҙ", - тип ведомстволан граждандарға мөрәжәғәт иттеләр.

**БАШИНФОРМ"**
**материалдары файҙаланылды.**

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# БРЕНДБУК КӘРӘК

**Республика Башлығы Радий Хәбиров 2024 йылда билдәләнәсәк Өфө ҡалаһының 450 йыллығын байрам итеүгә әҙерлек буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Унда ҡатнашыусылар баш ҡалала ошо датаға ҡарата сафҡа индереләсәк төп объекттарҙың проекты буйынса фекер алышты.**

Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаров Октябрь районында төҙөләсәк күп функциялы Көрәш үҙәге концепцияһы менән таныштырҙы. Уның базаһында халыҡ-ара һәм Рәсәй кимәлендәге спорт ярыштарын үткәреү, спортсылар әҙерләү, тренерҙарҙы һәм судьяларҙы аттестациялау тормошҡа ашырыласаҡ.

Юбилейға арнап төҙөләсәк спорт ҡоролмалары араһында шулай уҡ ишеү слаломы һәм Фехтование үҙәге лә бар. Киров районында Евразия китапханаһын төҙөү планлаштырыла. Унда бик күп саралар уҙғарыу һәм балалар, йәштәр өсөн мәғрифәтселектең заманса форматтарын ҡулланыу күҙаллана. Мәғариф өлкәһендәге тағы бер проект - 350 уҡыусыға иҫәпләнгән һәм 250 урынлыҡ ятағы булған Математика лицейын төҙөү. Ул илдәге башҡа шундай учреждениелар өсөн иң яҡшы өлгө булып торорға тейеш.

Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин Октябрь революцияһы урамын реконструкциялау проектын тормошҡа ашырыу барышы менән таныштырҙы. Уның концепцияһы транспорттың ике һыҙатлы хәрәкәтен һаҡлауҙы, бер өлөшө мәҙәни мираҫ объекты тип һаналған биналарҙы ремонтлауҙы, йәйәүлеләр зонаһын киңәйтеүҙе һәм заманса планировкалы уңайлы ҡала киңлеген булдырыуҙы күҙаллай. Өфө ҡалаһы мэры Сергей Греков 2024 йылға ҡала 90 күп фатирлы торлаҡ йорт фасады тәртипкә килтереләсәген белдерҙе.

Башҡортостан Башлығы баш ҡаланың төп урамдарында кеше күп йөрөгән урындарҙа архитектура яҡтыртыуын булдырыу зарурлығына иғтибар йүнәлтте. "Республиканың Торлаҡ-коммуналь хужалығы министрлығы урамдарҙы яҡтылыҡ менән тәьмин итеү һәм биналарҙы яҡтыртыу мәсьәләһен Өфө ҡалаһы хакимиәте менән берлектә хәл итергә тейеш", - тине Радий Хәбиров. Төбәк Башлығы шулай уҡ Башҡортостандың баш ҡалаһының 450 йыллығына брендбук эшләй башларға ҡушты. Ул киң ҡулəмле мəҙəни саралар əҙерләгәндә, байрам майҙандарын, транспортты, сауҙа-сервис объекттарын, төрлө сувенир продукцияһын биҙәгәндә ҡулланыласаҡ.

# КҮПЕР АСЫЛА

**Ноябрҙең тәүге көндәрендә Ағиҙел йылғаһы аша һалынған яңы күпер файҙаланыуға тапшырыласаҡ. 23-27 октябрҙә ул конструкцияларҙың нормаларға тап килеүе, проект көсөргәнешенә сыҙамлыҡ буйынса тикшереү һәм һынау үтте.**



- Был күпер - беҙҙең дөйөм ҡаҙаныш. Бындай ҡоролмаларҙы сафҡа индереү ваҡыты өс йыл, әммә беҙ кәмерәк ваҡытта эшләнек, - ти "Уралмостострой" акционерҙар йәмғиәтенең филиалы булған 30-сы Мостоотрядтың баш инженеры Виктор Карячка.

Һынау өсөн һәр береһе 35 тонна йөк тейәлгән 12 өс үҙәкле автосамосвал йәлеп ителгән. Һынау көсөргәнеше 420 тонна тәшкил итә. Хәрәкәттәге һынау ваҡытында күперҙән 30 тонналыҡ машиналар берәмләп, сәғәтенә 10 километр тиҙлек менән үтә. "Һынау буйынса һығымталарҙы алғас, күперҙә асырға мөмкин. Был объекттың үҙенсәлеге шунда, ул ике күпер араһында төҙөлгән, - ти Өфө ҡала хакимиәтенең капиталь төҙөлөш булеге начальнигы урынбаҫары Андрей Исаев. - Төҙөүселәр ауыр, көсөргәнешле шарттарҙа эшләне. Бөгөнгө был илдә беренсе шундай күпер".

Әйткәндәй, күперҙең оҙонлоғо 688,8 метр, унда ҡаланан сығыу йүнәлешендә өс һыҙатлы бер йүнәлешле хәрәкәт ойоштороласаҡ. Бөгөн ике күперҙән тәүлегенә яҡынса 125 мең автомобиль үтә. Яңы күпер сафҡа инеү менән ҡалаға көньяҡтан кереү һәм сығыу йүнәлешендәге көсөргәнеш бер ни тиклем кәмер тип көтөлә.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ИҒТИБАР - БАЛАЛАР!

**Дәүләт автоинспекцияһы 25 октябрҙән 12 ноябргә тиклем Башҡортостанда "Иғтибар - балалар!" киң ҡулəмле акцияһын иғлан итә. Ул республиканың барлыҡ район-ҡалаларында үтәсәк һәм уның барышында юл-транспорт йәрәхәтен иҫкәртеү буйынса саралар комплексы тормошҡа ашырыласаҡ.**



БР буйынса ЮХХДИ-ның матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәренә ярашлы, йылдың 9 айында Башҡортостан юлдарында балалар ҡатнашлығында 377 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, уларҙа 16 бала һәләк булған, 420-һе төрлө йәрәхәттәр алған. 163 юл-транспорт ваҡиғаһы балиғ булмаған балалар менән бәйле, уларҙа 14 бала һәләк булған, 198-е төрлө йәрәхәттәр алған. Хәүефһеҙлек ҡайыштарын эләктермәгән йәки балалар креслолары булмаған 8 авария теркәлгән, уларҙа 2 бала һәләк булған. Балалар ҡатнашлығында күҙәтелгән юл-транспорт ваҡиғалары һанын кәметеү һәм уҡыусыларҙың юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы иҫкәртеү маҡсатында ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре балиғ булмағандар эше буйынса инспекторҙар менән берлектә рейдтар үткәрәсәк, белем биреү ойошмалары уҡытыусылары, үҙ сиратында, уҡыусыларға тағы бер тапҡыр юлдарҙағы хәүефһеҙлек хаҡында иҫтәренә төшөрәсәк.

# КОНКУРСҠА САҠЫРАЛАР

**"Рәсәй - мөмкинлектәр иле" йәмғиәте Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы менән берлектә "Мәғариф флагмандары. Мәктәптәр" Бөтә Рәсәй һөнәри конкурсын ойоштора.**

Сараның маҡсаты - белем биреү ойошмаларында Рәсәй мәғарифының заманса тенденцияларына ярашлы алдынғы педагогик һәм идара итеү тәжрибәһенә эйә булған командаларҙы асыҡлау, үҫтереү һәм яҡлау. Конкурс быйылғы йылдың октябрендән 2022 йылдың июненә тиклем барасаҡ һәм түбәндәге этаптарҙан тора: ҡатнашыусыларҙы теркәү (2021 йылдың октябрь-ноябрь айҙары); онлайн тестлау (2021 йылдың декабре); округтарҙағы ярымфиналдар (2022 йылдың ғинуар-марты); конкурстың Бөтә Рәсәй финалы (2022 йылдың апреле); суперфинал (2022 йылдың июне). Конкурсҡа бер белем биреү ойошмаһынан дүрт педагогтан торған команда - етәкселектән (директор йәки директор урынбаҫары), бер класс етәксеһе, башланғыс, төп, урта дөйөм белем биреү звеноһынан педагогтар ҡатнашырға тейеш. Конкурсҡа ҡатнашыу өсөн команданың һәр ағзаһы ағымдағы йылдың 30 ноябренә тиклем бәйгенең рәсми сайтында электрон алымда теркәлеү үтергә тейеш, тип хәбәр итә bashgazet.ru

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ДЕКРЕТ ЯЛЫНА... АТАЙҘАР

**Рәсми мәғлүмәттәргә ярашлы, йылдан-йыл декрет ялындағы атайҙарҙың артыуы күҙәтелә.**

Мәҫәлән, SuperJob сервисы тикшереүҙәре күрһәтеүенсә, һорау алыуҙа ҡатнашҡан ир-егеттәрҙең 35 проценты декретҡа "китеүҙән" ҡырҡа баш тартҡан, 12 проценты - быны мөмкин икәнлеген, 27 проценты бала ҡарауҙа яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алырға әҙер булыуын белдергән. Әгәр ҙә 2015 йылда 10 процент ир-егет декрет ялына сыҡһа, 2020 йылда был һан 17 процентҡа еткән. Ғаиләнең бындай һайлауы күп осраҡта финанс яҡҡа бәйләнгән, йәғни ҡатын-ҡыҙҙың күберәк эш хаҡы алыуы. Башҡортостан Республикаһының Хеҙмәт министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2020 йылдың икенсе яртыһында эшләп йөрөүсе 376 ир-егет бала ҡарау буйынса ялға сыҡҡан.

# ЭШҺЕҘҘӘР КҮП ӘЛЕ

**Статистикаға ярашлы, Башҡортостанда ағымдағы йылдың май - июль айҙарында, 15 һәм унан өлкәнерәк йәштәгеләр араһында эшләүселәр 1,905 миллион кешегә кәмегән.**

Уларҙың 1,823 миллиондан ашыуы иҡтисад өлкәһендә эшләгән булһа, 81,7 мең кеше эшһеҙҙәр классификацияһына ҡараған. Ошо уҡ айҙарҙа, Башстат мәғлүмәттәренә ярашлы, республикала эшһеҙлек буйынса дөйөм күләм 4,3 процент тәшкил иткән. Рәсәй буйынса был күрһәткес уртаса 4,7 процент тәшкил итә, Волга буйы федераль округында - 4 процент. Август аҙағына республиканың эшһеҙлек буйынса мәшғүллек үҙәктәрендә 40,1 мең кеше иҫәптә торған. Август айында ғына "эшһеҙ" статусы 6,5 мең кешегә бирелгән. Ә 3,5 мең кеше эш урыны тапҡан. Был былтырғы йылдың авгусы менән сағыштырғанда 15,7 процентҡа кәмерәк.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һалҡын тейһә

❖ Һалҡын тейеүен һиҙгәс тә 1 балғалаҡ ҡәнәфер төнәтмәһе эсергә кәрәк. Уны әҙерләү өсөн 10 ҡап ҡәнәферҙе 0,75 литрлыҡ ҡара төҫлө шешәгә һалырға. Өҫтөнән 4 иле сығарғансы араҡы ҡойорға. Был дауа бик оҙаҡҡа етә, яртыһы бөткәс, араҡыны өҫтәп ҡойорға ярай.

❖ Шулай уҡ шифалы сәй эшләп эсеү ҙә файҙалы. Бының өсөн ярты балғалаҡ ҡара сәй, алма, бөтнөк, мелисса, ҡурай еләге, ҡарағат япраҡтарын алып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм ҡапҡас ябып 20 минут төнәтергә. Шунан һөҙөргә, 1 балғалаҡ шәкәр йә бал, лимон киҫәге өҫтәп эсергә.

### Коронар синдромы

❖ 1 ҡалаҡ энәлек (боярышник) сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. 2 сәғәт ауыҙын ябып төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне 2-3 ай дауамында көнөнә 3-4 тапҡыр сирек стаканлап эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ энәлек емешен ваҡлап, 1 балғалаҡ аҡ әнис емешенә ҡушырға. Йыйылмаға 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә термоста ҡалдырырға. Төнәтмәне көн дауамында 5-6 өлөшкә бүлеп эсеп бөтөргә.

❖ Коронар ҡан әйләнеше боҙолғанда түбәндәгесә әҙерләнгән дауа файҙалы. 100-әр грамм арыҫлан ҡойроғо үләне, шифалы ромашка сәскәлеге, энәлек сәскәһе, 50-шәр грамм ҡайын япрағы, бүҫер үләне (грыжник голый) һәм арса (вереск обыкновенный) үләндәре, аҡтамыр (пырей ползучий) тамырһабағы, каштан сәскәһе (каштан конский) алып, бергә ҡушырға һәм ваҡларға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, йылыға төрөп 30 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә ике тапҡыр: иртәнсәк ас ҡарынға һәм кискеһен йоҡлар алдынан йылы көйөнсә яртышар стакан эсергә. Дауаланыу мөҙҙәте 2-3 ай.

❖ Төрлө йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән 3 өлөш петрушка һуты (1 өлөш - 15 мл), 5 өлөш сельдерей һуты, 9 өлөш кишер һутын ҡушырға. Ошо шифалы һутты көн дауамында эсеп йөрөргә.

Ғәлиә ШӘМСИЕВА
әҙерләне.

*ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!*



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

Бала сағын Ҡағы заводында үткәргән Д.И. Татаринов атаһы, интеллигент кеше, "башҡорттарҙың туҙҙан, ағастан һәм ҡабыҡтан яһалған ҡул эштәре" менән ҡыҙыҡһыныуы тураһында хәтерләп һөйләгән. Унда башҡорттарҙың бүләге һаҡланған: "ағастан һырлап эшләнгән айыу, бүре һәм төлкө һынландырылған бөтөн сылбырҙар. Сылбырҙар бер ағас киҫәгенән ябай бысаҡ ярҙамында яһалған".

Быға оҡшаш сылбырҙы Художество музейы өсөн һатып алыуы тураһында 1937 йылғы "Сәнғәт" журналында баҫылған бер мәҡәләһендә В.С. Сыромятников телгә ала. Сылбыр 72 оҙонса түңәрәк быуындан (2,5х4см) һәм бүре һынландырылған өс сулпылы дүңгәләктән (8,5х11см) торған. "Ниндәй оҫталыҡ, энергия, маҡсатҡа ишеү теләге ята!" - тип һоҡланыуын белдерә ағас оҫтаһына рәссам. Татарстандың тарихи-тыуған яҡты өйрәнеү музейында һәм Санкт-Петербургтағы этнография музейында 95-96 быуындан торған сылбырҙар һаҡлана. Дүңгәләк эсендәге һын бер ҡараһаң, бүрене, бер ҡараһаң, төлкөнө хәтерләтә. Музейҙарҙа айыу һыны эшләнгән сылбырҙар ҙа осрай.



Ағас суппылар. БР ММ фондынан. М.Д. Кузнецов рәсеме

Художестволы әйберҙәрҙең икенсе төрө зауыҡ өсөн генә түгел, көнкүрештә тегенеү кәрәк-ярағын, биҙәүестәрҙе, документтарҙы һаҡлау өсөн ҡулайлы ҡумталар. Улар бер бөтөн ағас киҫәгенән һандыҡ формаһында итеп һырлап яһалғандар. Ҡапҡасы күтәреп йәки шылдырып асылмалы булған. Ҡайһы бер ҡумталарҙың эсе бүлемле, йәшерен биге бар. Һауыттың ҡабырғалары һәм ҡапҡасы үҙенсәлекле ысул менән биҙәлгән, биҙәктәр традицион булған. Башлыса контурлы йәки "желобная резьба" ҡулланылған. Бөтә ерлек ҙур дүртмөйөштәргә, тура дүртмөйөштәргә йәки ҡыя дүртмөйөш һәм өсмөйөштәргә бүлгеләнгән. Был фигуралар параллель тура һыҙыҡтар, йәки ҡыя һыҙыҡтар, мөйөшләнеберәк киткән спираль менән тултырылған. Деталдәрҙең урынлашыуында ниндәйҙер анығ система, ғәҙәти симметрия һаҡланмаған. Был әйбергә төшөрөлгән тамға-символдарҙың тылсымлы булмышын көсәйтеберәк ебәргән.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*КЛАСС СӘҒӘТЕ*

# ТЕЛӘЙЕМ... ЯРАМАЙ...



**Үткән класс сәғәтендә "Мин кем?" һорауына яуап биргәндә, әлбиттә, үҙебеҙҙең эске донъябыҙға бөтөнләй ҡағылманыҡ. Кеше шулай ҡоролған: эске донъяһын ат башындай алтын бирһәң дә тулыһынса асып бирмәйәсәк. Хатта гипноз тәьҫирендә лә.**

Шулай итеп, нимә һуң ул эго? Уны нимәгә ҡушып "ашайҙар"?

Бөтәбеҙгә лә билдәле, ниндәйҙер күренмәгән сиктәр айыра беҙҙе. "Мин" һәм "минеке", "мин түгел" һәм "минеке түгел" тигәндә аңлау беҙҙе бергә укмаштырмай, аңлайышһыҙ һоро массаға әйләндерә алмай. Ниһәһе ҡыҙыҡ, беҙ үҙебеҙҙең "мин"ебеҙҙе һәр саҡта ла ыңғай яҡтан ҡабул итәбеҙ. Ә башҡалар? Уларҙы беҙ йә оҡшатабыҙ, йә үҙебеҙгә ҡапма-ҡаршы ҡуябыҙ. "Мин кем?" һорауына яуап биргәндә ана шул айырмалы яҡтарыбыҙҙы күрһәтергә тырыштыҡ та инде.

Ә эске донъябыҙға килгәндә, ул ысынлап та өйрәнелмәгән йыһан һымаҡ. Үҙебеҙҙе үҙебеҙ аңлап етмәйбеҙ, шунан эргәндәгеләрҙе үтәнән-үтә күрәм, тип әйтеп ҡара. Бер ҡатлы түгелбеҙ! Бөтә хикмәт ошонда ла инде. Бушҡамы ни, "Бер ҡатлылыҡ уғрылыҡтан насар", тип әйтмәйҙәр. Бындай осраҡта беҙ түбәнге аң кимәленә һылтанабыҙ ҙа, шуның менән вәссәләм. Ярай, аң кимәле, түбәнге аң кимәле бар икән, ти. Әйҙәгеҙ, уны фронталь яҫылыҡта ҡарамай, бөгөн модаға ингән 3D форматына күсерәйек. Ни өсөн тигәндә, түбәнге тип атаһаҡ, уның өҫкө яғы булырға тейеш. Өҫкө-аҫҡы, йәғни өҫтә аң кимәле, түбәндә түбәнге аң кимәле. Нисектер, аңлайышлыҙ килеп сыға. Бәлки, уны түбәнге тимәй, төпкө аң кимәле тип аңларға кәрәктер.

3D форматында миҫал өсөн йомортҡаны күҙ алдына килтерәйек. Уның һарыһын төпкө аң кимәле тип ҡабул итәйек, ә ағы - аң кимәле икән, ти. Дөрөҫөн әйткәндә, аң кимәле тураһында теориялар күп. Уларҙың араһында Зигмунд Фрейдтың шәхес теорияһы оҙаҡ йыллар йәшәй. Уны күптәр примитив тип һанай, сәйер тип тә атайҙар, мәҙәк һымаҡ ҡабул итеүселәр ҙә бар. Әммә Фрейдтың концепцияһы кешеләрҙәге күп кенә холоҡ һыҙаттарын ышаныслы итеп аңлата ала. Шәхестең структураһын, тәҙәлөшөн ул өс төргә бүлеп ҡарай: либидо, эго һәм супер-эго. Баяғы беҙҙең миҫал буйынса либидо - йомортҡаның һарыһы, эго - ағы, супер-эго йомортҡаның ҡабығы була инде. Ябай ғына итеп аңлағанда, йомортҡаның һарыһындағы аңыбыҙға баш бирмәҫ теләктәребеҙ, нәфсебеҙ һалынған. Уларҙың һәр ваҡыт ҡәнәғәтлек тойғоһо кисергеһе килә. Бәләкәй балаларҙа ул асығыраҡ күренә. Улар, мәҫәлән, "юҡ", тиген һүҙҙе аңламай.

- Әсәй, минә туңдырма алып бир, - тип һорай бала.
- Юҡ, - ти әсәһе.
- Бер тапҡыр ғына!
- Юҡ! - тип әйттем.
- Анау иң бәләкәйен генә булһа ла!
- Юҡ!

Диалог күпме генә дауам итһә лә, бала юҡ тигәнде барыбер аңламаясаҡ. Сөнки әле уның аң кимәле шундай. Йәйләп эгоһы либидоһына баш бирмәй башлаясаҡ. Быны, төпкө аң кимәле тарая бара, тип уйларға ярамай, киреһенсә, йәшәү барышындағы тыйыуҙар либидоға ҡәнәғәтләнмәй ҡалған тойғолар булып төшөп ятасаҡ һәм уны киңәйтәсәк. Ә тыйыуҙар ҡайҙан килә? Бая өҫтә әйткән супер-эгонан килә. Супер-эго - ул һинең намыҫың, оялыуҙарың. Фрейд билдәләүенсә, был өс кимәл араһында тотороҡло тигеҙләнеш, йәғни күңел тыныслығы юҡ. Либидолағы ҡәнәғәтләнеү һораған бәйһеҙ теләктәр, бер яҡтан, үҙенекен талап итә, икенсе яҡтан, супер-эголағы үҙендә тәртипле торорға кәрәк, тиген талаптар йәҙрәк күрһәтә. Эгобыҙ һандал менән сүкеш араһында сүкелә, шәхес булып формалаша. Белем кимәлдәребеҙ буйынса айырылабыҙ, уныһы бәхәсһеҙ. Ә быйна аң кимәленә килгәндә, күргәнегеҙ бармы берәүҙең урам буйлап "Был донъяла иң алйот мин", тип ҡысҡырып йөрөгәнен? Нуленсе шкала бармы алйотлоҡ кимәлен билдәләүсе? Ай-һай, бер ҡатлы түгелбеҙ! Йомортҡа һымаҡбыҙ. Ә йомортҡанан яңы йән эйәһе тыуа...

Көрәшәбеҙ! Йәшәгә килә! Сөнки ул инстинкт та либидобыҙға һалынған. Супер-эго менән либидо араһында көрәшеп йәшәгән эгобыҙҙы баҡсасы һымаҡ күҙ алдына килтерәйек. Оҫта баҡсасы, әлбиттә, баҡсаһын сүп-сарҙан таҙартыуҙы беренсе урынға ҡуя. Баҡсала үҙе телгән емеш-еләктәрҙе генә үстерә. Һайлап эш итә. Уның өҫтөнлөгө шунан ғибәрәт. Бөтөн бәлә шунда: беҙҙең либидобыҙ, йәғни төпкө аң кимәлебеҙ, һайлай белмәй, ҡайғыбыҙ ҙа, шатлығыбыҙ ҙа, позитив уйҙарыбыҙ ҙа, негативтары ла шунда төшөп ята. Билдәле бер ваҡытҡа тиклем. Һәм төрлө ауырыуҙар, неврозлар булып, аҙаҡ өҫкә килеп сыға. Ҡый үләндәренән тулыһынса ҡотолоп та булмайҙыр. Әммә йәшәү көсө бирерҙәй емештәр үҫтереү мөмкинлеге һәр беребеҙгә бирелгән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Либидобыҙ "теләйем", "кәрәк", тигән илаҡ баланы хәтерләтә, ә супер-эгобыҙ "ярамай", "оят була", тигән мыжыҡ әбейҙе (ҡатын-ҡыҙҙар, ғәфү итегеҙ, мыжыҡ бабай образы ныҡғынмаған). Ә эгобыҙ ошо ике сик араһында дипломат һымаҡ ғүмере буйы алтын урталыҡ эҙләй. Эголар аралашҡанда диалогта ике кеше ҡатнашамы икән? Бәлки, алтылыр? Киләһе дәрестә шул турала һөйләшербеҙ. Фекер туплағыҙ.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҠАРТАТАЙ ТӘРБИӘҺЕ



Бер мәл көпә-көндөҙ 96 йәшлек ҡарт түгелеп илап ултыра икән. Унан ни сәбәпле илап ултырыуы хаҡында һорашҡандар икән, ул: "Атайымды тыңлашмағайным, ҡартатайым туҡманы", - тип яуап биргән. "Алйот, ҡартайыңдың туҡмағаны өсөн түгел, иҫән булғаны өсөн шатлығыңдан иларға кәрәк һиңә..." - тип әйткәндәр тегеләр ҡартҡа. Был хәл, ай-һай, беҙҙә булмағандыр ул. Ни өсөн тигәндә, башҡорт донъяһында ҡартатай менән ейән, ҡартәсәй-өләсәй менән ейәнсәр араһындағы мөнәсәбәт иң самими мөнәсәбәттәрҙән һанала. Бында шундай башваҡкыс килеп сыға: ейән булған кеше атаһынан күрмәгән игелекте, йылы мөнәсәбәтте, яҡшы мөғәмәләне ҡартатаһынан, ә ҡартатаһы улына бирмәгән наҙҙы һәм йылылыҡты ейәненә бирә.

Бында "Баланың балаһы балдан татлыраҡ була", тиген мәҡәл-әйтем генә ярап бөтмәйҙер, ахыры. Мәсьәләнең асылы төптәрәк ятылыр. Атай һәм ҡартатай булған ике кеше, алдан килешеп-һөйләшеп ҡуймаһалар ҙа, улға-ейәнгә ошондай мөнәсәбәттә булып, икеһе лә бер үк ғәмәлдә башҡара. Береһе, ҡартатай - улына бирә алмаған һыуһынын ҡандыра, икенсеһе, атай - үҙ атаһынан алып бөтмәгән ҡырыҫлыҡты улына ҡарата мөнәсәбәт менән яндыра. Тәрбиәнең бындай үҙенсәлекле һәм ҡатмарлы формаһын кем уйлап сығарғандыр, ҡасан башланғандыр, әммә ул беҙҙең ҡанда йәшәй. Нисек кенә булмаһын, тәрбиә объекты булған үсмерҙә ысын ирҙәргә хас характер формалаштырыуҙа был мәктәп тотош бер институтты тәшкил итерлек. Тик атайҙар һәм ҡартатайҙар ғына иҫән-һау булһын.

Шуныһы ла бар: атайҙарҙың улдарына ҡарата булған "ҡырыҫ" мөнәсәбәтен әсәйҙәр бик оҫта файҙалана. "Атайыңа әйтәм!" тигән бармаҡ янаулы мөнәсәбәт бына ошонан барлыҡҡа килгәндер ҙә инде. Ә башҡалар нисек уйлай икән?

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*✓ Старшина Шәрип Мораҡов ихтилалды баҫтырыуға үҙе лә ҡатнаша, башҡа ырыуҙарҙың ихтилалсы башҡорттарын буйһондороу маҡсатында махсус отрядтар төҙөй.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БЕҘ - ҠАРШЫНДАР, ЯУГИР ЗАТЛЫ БАШҠОРТБОҘ



Карателдәр тарафынан 1738 йылдың 21 майында яҙылған экстрактта ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "...Апреля 22 от верных старшин Шарыпа Мрякова, Аракая Акбашева объявлено: воры башкирцы приезжая команд их 4 деревни раззорили, а имянно дер. Ишмухаметеву, дер. Салтарову, дер. Бишказы, дер. Узы-баши, да убили верных башкирцов 4-х, ранили 2-х, полонили 3-х человек, а скот и пожитки все побрали, а у них воров убит главной Чюрагул".

Старшина Шәрип Мораҡов ихтилалды баҫтырыуға үҙе лә ҡатнаша, башҡа ырыуҙарҙың ихтилалсы башҡорттарын буйһондороу маҡсатында махсус отрядтар төҙөй. 1740 йылда ихтилал башлығы Ҡараһаҡалды эҙәрлекләү өсөн капитан Кублицкий ҡарамағына 200 атлы яугир оҙата. Яуыз старшинаға яҡын булған ырыуҙаштары - старшина Араҡай Аҡбашев, сотниктар Яҡуп Аслаев, Мәмәк Ҡатиҡов та унан сикһеҙ биҙеп, 1741 йылда Өфө вице-губернаторы П.Д. Аксаковҡа шикәйәт ебәрә: "...старшина Шерып Мряков насилием своим чинит нам, имянованным, великую обиду, а именно: с сенных покосов и с вод рыбных, с припущенников, собирая оброк, нам, имянованным, ничего не дает".

Әйтергә кәрәк, башҡорт ихтилалдарына ҡатнашмаған, карателдәр тарафынан ауылдары яндырылмаған, йөҙәрләгән, меңәрләгән кешеләре үлтерелмәгән, әсиргә алынмаған, яҙаланмаған Ҡаршын ырыуы халҡы XVIII быуат урталарына катастрофик рәүештә кәмеүгә дусар була. Әгәр Көнгөр бургомистры Юхнев 1725 йылда Ҡаршын олоҫонда барлығы 700 хужалыҡ булып, хәрби хеҙмәткә яраҡлы 2 100 ир-ат булыуын теркәһә (ҡаршындарҙың дөйөм һаны яҡынса 10 000 кешенән ашыу була), тарихсы Рычков мәғлүмәттәренә ярашлы, XVIII быуат урталарында ошо олоҫта ни барыһы 77 хужалыҡ ҡала. Быны тик бер генә сәбәп менән аңлатып була: аһил олоҫ старшинаһын күрә алмаған, башҡа башҡорт ырыуҙары халҡы менән теләктәшлек күрһәткән ҡаршындар, үҙ ерҙәрен ташлап, башҡа тарафтарға сығып китергә мәжбүр була.

Ете йыллыҡ һуғыш башланыу менән (1756 - 1763) императрица Елизавета Петровна хөкүмәте 500-әр атлы яугирҙан торған башҡорт һәм мишәр полктарын Пруссия армияһына ҡаршы барған һуғышҡа ебәрергә була. Был 1 000 кешенән торған башҡорт-мишәр отряды 1756 йылдың 8 октябрендә Ҡаршын олоҫонон Шәрип ауылында туплана һәм подполковник Боргентрейх командалығында Пруссияға оҙатыла. Был яугирҙар намыҫ менән һуғыша, әммә хөкүмәт уларҙың ҡаһармандығын кеше башына ни барыһы 1-әр һум аҡса менән баһалай: "...из башкирского, мещеряцкого и колмыцкого войск командировано в 756-м в заграничную армию тысяча пятьсот человек, а в 757-м годех августа 19 дня за оказанные под Виллавою храбрые действия пожаловано всей армее... токмо по малоимению тогда денежной казны произведено вышепомянутому войску единственно на один месяц, то есть каждому человеку по одному рублю". Был яуҙа Ҡаршын олоҫонан старшина Әхмәр Шәрипов етәксегендә 9 кеше ҡатнаша: Аҡбаш ауылынан - Әтүн Туктаров, Юлдаш Әмитев, Шаммәт Ырыҫов; Мәмәк ауылынан - Өмөтҡол Киленев, Сыртлан Сөләймәнов; Шәрип ауылынан - Әлкәй Мөләкәев, Юнай Атәймәҫов; Мөнәк ауылынан - Мөхәт Арыҫланов, Әбдраҙаҡ Туғайсурин.

1767 йылда яманатлы даны менән танылған Шәрип Мораҡовтың улдары Вәлиша һәм Яҡуп Шәриповтар Екатерина II батшабикәгә, үҙҙәренә поход старшинаһы һәм сотник чиндары биреүҙе һорап, мөрәжәғәт итә. Бер аҙ ваҡыт үтеүгә, уларҙың һорауын хуплап, Ырымбур генерал-губернаторы А.А. Путятиндан түбәндә килтерелгән йөкмәткеле билдәләмә хаты килә: "...По указу Ея Императорского Величества..., слушав доношения, поданного к нему, тайному советнику и кавалеру, Уфимского уезду Казанской дороги Каршинской волости бывшаго главного башкирского старшины Шерыпа Мрякова детей - сотника Валиша да редового Якупа Шерыпова, коим, изъявляя реченного отца их, Шерыпа, во время произошедших башкирских замешательств верные и против протчих старшин отличные и похвальные службы и что он, Шерып, за те его службы по указам е. и. в. и с Правительствующего Сената Оренбургской губернской канцелярии тремя саблями, деньгами и похвальными указами был награжден".

Әле иҫкә алынған старшина Шәрип Мораҡовтың башҡа башҡорттар үҙ хоҡуҡтары өсөн үлемесле алышҡа сыҡҡан заманда батша властарына тоғро хеҙмәт итеүе, бүләктәр алыуы бер генә тарихи хәҡиҡәтте раҫлайҙыр - яуҙа һәләк булған батырҙарына халҡы дан йырлаһа, аһиллығы менән танылған әҙәмдәрҙең, күп быуаттар үтеп киткәс тә, бары тик яманатлы исеме генә ҡала.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 39,40, 43-сө һандарҙа).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Корпус командиры, генерал-майор М.Д. Борисовтың Бөйөк Ватан һуғышынан һуң генерал-лейтенант С.П. Платоновҡа яҙған хатында 7-се гв. корпусының трагедияһы хаҡында бына ниҙәр бәйән ителә: "Ҡамау ҡулсаһын ҡыҫа барып, дошман ашығыс рәүештә үҙ көстәрен арттырыуҙы дауам итте. Атлыларға катастрофа янай ине. Корпус командиры 3-сө гвардия армияһы командующийынан (генерал-лейтенант Д.Д. Лелюшенко. - **Авт. иҫк.**), ә һуңынан Көньяҡ-Көнбайыш фронты командующийынан (армия генералы Н.Ф. Ватутин. - **Авт. иҫк.**) уға биләгән районды ҡалдырып китергә һәм үҙ ҡарамағы менән хәрәкәт итергә рөхсәт һораны. Быға рөхсәт бирелмәне. Биләгән районды ҡулда тоторға тәҡдим ителде, шул уҡ ваҡытта, йәнәһе, танк һәм механизацияланған корпустарҙың 7-се гвардия корпусына табан (дошман фронтын. - **Авт. иҫк.**) йырып сыға башлауы хаҡында хәбәр ителде. Әммә был корпустар атлылар янына йырып сыға алманы. Шулай уҡ һуғыш припастары ла килтерелмәне".

Корпус командиры М.Д. Борисовтың ошо ситуацияға һуғыштан һуң биргән баһаһын объектив, тип әйтергә була. Хәҙер, ошо һәләкәтле йылдарҙан һуң 8 тиҫтә самаһы йыл үткәс, ул саҡтағы армия һәм фронт менән командалыҡ иткән генералдарҙың Ҡыҙыл Армияның Юғары Баш командующийы И.В. Сталин алдында үҙҙәренең ҡулы аҫтында һуғыш хәрәкәттәре алып барған совет хәрби частарының уныштарын нисек кенә булһа ла тиҙерәк күрһәтеп, тағы ла юғарыраҡ баһаға лайыҡ булырға тырышыуы, шәхси амбицияларының үтә лә көслө булыуы сер түгел. Былдай ситуацияла боеприпастарһыҙ, фуражһыҙ, аҙыҡ-түлекһеҙ ҡалған, дошман тылында аяуһыҙ юғалтыуҙарға дусар ителеп, бик аҙ ғына тере көстәре ҡалған атлы корпус ҡалдыҡтарын ҡорбан итеү юғары командирҙар тарафынан әллә ниндәй трагедия итеп тә ҡаралмағандыр инде. Күрәһең, генералдар Д.Д. Лелюшенко менән Н.Ф. Ватутин, 3-сө гвардия армияһының тиҙ арала ошо йүнәлештәге дошман фронтын тамам ҡаҡшатып, Донбасс территорияһын тулыһынса азат итә алыуына өмөтләнгән була. Командующийҙарҙың өмөттәре аҡланмай, фронт һыҙығындағы совет частары үтә уңышһыҙ хәрәкәт итә, дошман тылында ҡанға батып алышҡан 7-се гвардия корпусы яугирҙарына ерҙән дә, һауанан да бер ниндәй ҙә ярҙам килмәй...

Тағы ла генерал Борисовтың хәтирәләренә иғтибар итәйек: "17 февралгә шундай хәл барлыҡҡа килде: йә 7-се гвардия корпусы бер файҙаһыҙға һәләк булырға, йә булмаһа ҡамау ҡулсаһын өҙөп сығырға һәм, дошман тылында тиҙ хәрәкәт итеп, уны юғалтыуҙарға дусар итергә һәм уның тыл эштәрен ҡаҡшатырға тейеш. Корпус командиры 18 февралгә ҡаршы төндә ҡамау ҡулсаһын өҙөп сығырға бойороҡ бирҙе..."

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1860 йылдың 29 марты** - Хәрби Советтың "Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итеүсе сит халыҡтарҙың ҡатындарына Себергә һөрөлгән ирҙәре артынан балалары менән барырға рөхсәт тураһында" положение раҫлана.

➔ **1860 йылдың 21 июле** - Ырымбурҙағы ҙур янғын ҡала йорттарының дүрттән бер өлөшөн юҡҡа сығара.

➔ **1861 йыл** - Петербург медицина һәм хирургия академияһында А. Әбдиев башҡорттарҙан беренсе булып медицина фәндәре докторы дәрәжәһенә диссертация яҡлай.

➔ **XIX быуаттың икенсе яртыһы** - Лондонда (1862), Парижда (1867), Мәскәүҙә (1872, 1882) башҡорт дебет шәлдәре күргәҙмәһе була.

➔ **1861 йылдың март-апрель айҙары** - халыҡҡа крепостнойлыҡты бөтөрөү тураһында иғлан ителә.

➔ **1861 - 1918 йылдар** - башҡорт шағиры һәм тарихсыһы Ғәрифулла Кейековтың ғүмер йылдары.

➔ **1861 йылдың май-июнь айҙары** - Белорет, Тирлән, Ҡатау һәм Ырымбур губернаһының башҡа заводтарында эш хаҡын күтәреү һәм ял, байрам көндәрендә эшләүҙе ғәмәлдән сығарыу талабы менән забастовкалар үткәрелә.

➔ **1861 йыл** - "Ҡаҙан университетының ғилми хеҙмәттәре" йыйынтығында Мирсәлих Бикчуриндың башҡорт телендә "Өс ул" тигән хикәйәһе баҫыла.

➔ **1862** - Ырымбур, Орск һәм Соль-Илецк ҡалалары хәрби ведомстволан граждандыҡ тәртибенә күсерелә.

➔ **1862** - Бөйөк рус яҙыусыһы Лев Толстой Һамар губернаһына, Кәрәлек йылғаһы буйында йәшәүсе башҡорттарға ҡымыҙ эсергә килә. 1862-1883 йылдар эсендә ул башҡорттар янына ун тапҡыр була.

➔ **1862 - 1942 йылдар** - билдәле рәссам М.В. Нестеровтың ғүмер йылдары. 1913 йылда ул үҙенең тыуған ҡалаһы Өфөгә картиналарын бүләк итә, һәм шул нигеҙҙә 1919 йылда Өфөлә пролетар художество музейы (әлеге М.В. Нестеров исемендәге художество музейы) асыла.

➔ **1862 йылдың 11 июле** - "Ырымбур ҡөлгәнен бөтөрөү тураһында" указ сыға (ҡөлгә нығытмалары һәм ҡапҡалар юҡҡа сығарыла).

➔ **1862 - 1863 йылдар** - Урал губерналарында 49 тапҡыр крәҫтиәндәр болаһы була, тау заводтары эшселәре 55 тапҡыр баш күтәрә.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Һөнәрем буйынса эшкә урынлашырғамы, әллә шашка спортында ҡалырғамы? Оҙаҡ һәм етди әҙерләнгән уйында ҡатнашмай, юҡҡа көс түгәйемме ни, тим дә, шашканы һайлайым.*



# БЕРЕНСЕЛЕККӘ

## йөрәгенә сәм булып

(Башы 1-се биттә).

**Һеҙ төрлө кимәлдәге чемпионаттарҙа ҡатнашып, еңеүҙәр яулап өлгөргән тәжрибәле шашкасы бит инде. Шулай ҙа һәр уйын үҙенсәлеклеләр, был халыҡ-ара шашка буйынса Европа чемпионаты нимәһе менән айырылып торҙо?**

- Халыҡ-ара, йәки беҙ уны "йөҙ шаҡмаҡлы" тип йөрөтәбеҙ, шашка буйынса Европа Команда чемпионаты Италияның Тоскана провинцияһында үтте. Уйында 8 илдең ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар йыйылма командалары ҡатнашты. Тәүҙә өс дисциплина - классик, тиҙ һәм блиц буйынса йыйылма командалар менән уйнаныҡ. Рәсәйҙең ҡатын-ҡыҙҙар йыйылма командаһы Беларусь спортсыларына бер генә мәрәйгә отолоп, икенсе урын яуланы. Ир-егеттәр өс дисциплинала ла беренселекте бирмәне һәм ярыштың абсолют еңеүселәре тип табылды.

Рәсәй данын Башҡортостандан күп кенә шашкасылар яҡланы: донъя чемпиондары Тамара Танһыҡҡужина, Елена Мильшина, әлеге ваҡытта блиц буйынса донъя чемпионы Әлиә Әминова, ирҙәр араһында Айнур Шәйбәков, Александр Георгиев, Муродулло Амриллаев һәм йәш спортсы Даниил Ильин. Командалар менән ярышып бөткәс, тағы ла спортсылар өсһөлдә һәм беҙ үҙаллы чемпионатта ҡатнаша башланыҡ. Был ярыш тиҙ, йәки беҙ "рапид" тип йөрөткән дисциплинала һәм блиц буйынса үтте. Башта тиҙ программаны бер аҙ хөртөрәк уйнаным, 30-ҙан ашыу ҡатнашыусы араһында 16-сы урында ҡалдым. Был хаҡта шундағы иптәш ҡыҙҙарға әйткәс, беҙҙең ул ҡәҙәрем спортсы бармы ни ул, тип минән көлөп алдылар хатта. Шуға күрә, иртәгәһенә лә уйын килеп сыҡмаҫтыр инде, тип уйланым да, башымды ҡатырып торманым. Еңеп булмаһа ла, ҡыҙыҡ өсөн уйнайым әле, тип тынысландым. Әммә нисектер турнир башынан уҡ мәрәйҙәр үҙенән-үҙе ҡулыма килә башланы. Әйтәйек, бер яҡ те еңмәгән осраҡта ябайыраҡ ҡына "тоҙаҡ" ҡорһам да, ярышташтар шуға эләгә лә ҡуя ине. Йәйләп мәрәйҙәр йыйып, лидерҙар араһына күстем. Әгәр ярышта ҡатнашыусылар һаны 12-15 кешенән күберәк булһа, Швейцар системаһы буйынса уйнайбыҙ һәм йәмғеһе 9 партия килеп сыға. Етенсе тур тирәһендә Голландиянан бер тәжрибәле спортсы тура килде һәм уны еңеп булырға тейеш, тигән иманыста булһам да, был юлы "ничья" менән тамамларбыҙҙыр, тигәйнем. Әммә уйын аҙағына уның ҡапыл юғалып китеүен тойҙом һәм "Еңәм мин уны" тигән сәм барлыҡҡа килде. Ысынлап та, ул 1-2 йөрөштән ваҡыты буйынса еңелде. Уйын барышында таҡтаның ҡаршы яғында ултырған кеше уйҙарын, тойғоларын тышҡа сығармаһа ла, бына уның тулҡынлыҡҡан һиҙемләүҙәр йыш ҡына була.

Хәл иткес уйынды Украинаның көслө спортсыһы Виктория Мотричко менән уйнаныҡ. Икебеҙ ҙә был чемпионатта бер төрләрәк сығыш яһап килдек. Шуға, әгәр бер-беребеҙҙе еңә алмаһаҡ, беҙҙән бер нисәүгә генә кәмерәк мәрәй йыйған спортсылар ҡыуып етә һәм беҙ икенсе-өсөнсө урынға төшөп ҡалырға мөмкин инек. Бик көсөргәнешле уйнаныҡ, шулай ҙа партия аҙағына минең хәл яҡшыраҡ ине һәм уның бәләкәй генә хатаһы еңеү килтерҙе.

Дөйөм алғанда, был чемпионат башҡаларынан нимәһе менәндер айырылып торҙо тип әйтә алмайым. Сөнки бындай юғары кимәлдәге ярыштарға һәр ваҡыт илдәрҙең бер үк тиерлек спортсылары йөрөй, беҙ бөтәһе менән дә яҡшы таныш, уйын кимәлен дә самалайбыҙ. Ни бары йыйылма команда менән ярышҡанда яуаплылыҡ күберәк булды: ҙур хата эшләп, һынатып ҡуймайым, тип ҡурҡтым.

**Халыҡ-ара шашка уйынының өс дисциплинаһы буйынса ла Европа чемпионы титулына эйә өсөнсө кеше булдығыҙ. Шулай ҙа ҡайһы уйын төрө күңелгә яҡыныраҡ?**

- Әле блиц дисциплинаһында уйнауы күберәк оҡшай. Сөнки классик программала һәр аҙымды оҙаҡ уйлап, үлсәп яһарға кәрәк һәм уның ҡиммәте юғары. Был уйындар уртаса 4-6 сәғәт дауам итә. Тиҙ, йәки беҙҙенсә "рапид" программаһын 40-45 минут ултырып уйнайбыҙ, ә блиц иһә - 10-15 минут. Унда иғтибарҙы туплай белеү мөһим, һәр кемгә бирелгән 5-әр минут эсендә уйынды тамамлап өлгөрөү өсөн тиҙ генә уйларға, һайларға, йөрөргә кәрәк. Ә баштараҡ мин шул ҡыҫҡа программаларҙы уйнай белмәй инем, бер йөрөү өсөн 25-әр минут уйлап ултыра торғайным хатта. Бәлки, үҙ көсөмә ышанмаҙан да килгәндер был, тим. Ә хәҙер ул ҡәҙәрем ишелеп ултырмайым, уйынды тиҙерәк тамамлау яғын ҡарайым.

**Шашка донъяһына һеҙҙе кем алып килде?**

- Был мауыҡтырғыс уйын донъяһын минә башлап Ишембай районы Уразбай ауылында йәшәгән атайымдың атаһы - Мөҡәддәс олатайым асты. Уның өйөндә әҙәби китаптарҙан тыш, шашка һәм шахмат буйынса китаптар ҙа була торғайны, ул икеһен дә яҡшы уйнаны. Әммә, нишләптер, мине шашка уйнарға өйрәткән, ә башҡа ейән-ейәнсәрҙәре унан бер аҙ шахмат серҙәренә төшөндө. Балалар баҡсаһына һуңғы йыл йөрөгәндә шашка буйынса тренер Әлфиә Фәхретдинова килгәйне һәм беҙгә уйын үткәрҙе. Шунан һуң мине йәкшәмбе көнө шашка клубына саҡырҙы. Мин уға: "Гәфү итегеҙ, мин килә алмайым. Йәкшәмбе көнө әсәйем төшкө 12-гә тиклем йоҡлай", - тип яуап биргәнмен. Әлбиттә, был турала тәрбиәселәр әсәйемә көлөп һөйләгән. Йәкшәмбе клубҡа барҙым шулай ҙа...

Бына шулай башланып киткән ҡыҙыҡһыныуымды артабан Ә.-З. Вәлиди исемендәге 2-се башҡорт гимназия-интернатында ла үҫтерергә мөмкинлек булыуына бөгөн оло рәхмәтлемен. Ул саҡта белем усағының директоры Гөлназ Әхмәҙиева шашка түңәрәген ойошторғайны һәм башланғыс синыфтар аҙнаһына бер тапҡыр унда мотлаҡ йөрөргә тейеш булды. Әсәйем Раушания Рамаҙан ҡыҙы бында башланғыс синыфтар уҡытыусыһы, мин уның класында һәм беҙ был түңәрәкте һис ҡалдырманыҡ. Класыбыҙҙан ете шашкасы үҫеп сыҡты, алтауһы - спорт мастерлығына кандидат. Ярыштарға гел бергә йөрөй, үҙ-ара алдынғылыҡ өсөн тырышып шөғөлләнә торғайныҡ. Ҡайны саҡ ярышып йөрөп, уҡыуҙа артта ҡала башлаһаҡ, әсәйем беҙҙе дәрестәрҙән һуң алып ҡалып темаларҙы аңлата ине. Ләкин беҙ, шашкасылар, аҡыллы бит, уҡыуҙа артыҡ ҡыйынлыҡтар тыуғаны булманы ла. Өйҙә лә мине һәр ваҡыт күтәрмәләп, яңы еңеүҙәргә әйҙәп торҙо атай-әсәйем. Бигерәк тә ярыштар араһында оҙағыраҡ шашканан ял итә башлаһам, "Шашкаңды ал, физикаңды уҡы", тип атайым иҫкәртмәй ҡуймаҫ ине...

Беҙ ғаиләлә өс бала үҫтек, хәҙер барыбыҙ ҙа юғары уҡыу йорттарын тамамлап, үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫҡанбыҙ. Дим ҡустым минең кеүек Башҡорт дәүләт университетында, ә Лилиә һеңлем Башҡорт дәүләт медицина университетында белем алды һәм әлеге көндә хеҙмәт юлына аяҡ баҫтылар. Ҡустым ғына үҫмер сағында шашка менән бер аҙ мауығып алыуға-алды былай, әммә улар минең кеүек был уйынды ғүмерлек юлдашы итмәне.

**Әйткәндәй, бала саҡта, үҫмер йылдарында бик күптәр шашка-шахмат уйнаһа ла, артабан икенсе һөнәр һайлап, был шөғөлдәрен ташлап ҡуя. Шашкаға тоғро ҡалырға нимә йәки кем ярҙам итте?**

- Ысынлап та, әле шашка клубында шөғөлләнгән балалар араһынан да һанаулылары ғына был спорт тәрөндә артабан үҫешеүҙе һайлаясаҡ. Бәлки, йөҙ кешенән берәү генә булыр, мендән берәү булмаһа ла, һәм был нормаль күренеш. Минең дә шашканы ҡалдырыу тураһында уйҙар булманы түгел, булды. Иң ҡатмарлыһы мәктәпте тамамлаған йылдағы икеләнеүҙәр булғандыр: ниндәй юғары уҡыу йортон, ниндәй һөнәр һайларға, уҡыу ҡатмарлы булһа, ярыштарға йөрөй алырмынмы кеүек бихисап һорауҙар борсоно. Шөкөр, Башҡорт дәүләт университетының Физика-техник институтын һайлап яңылышманым, уҡыу йылдарында етәкселектең дә, уҡытыусыларҙың да спортсыларға ҡарата ихтирамын, иғтибарын даими тойҙом. Тағы бер хәл иткес осор, әлбиттә, вуз тамамлаған йылда булды. Һөнәрем буйынса эшкә урынлашырғамы, әллә шашка спортында ҡалырғамы? Бына шундай хәл иткес ваҡыттарҙа гел берәй мөһим ярышта ҡатнашыу кәрәклеге тыуа ине. Оҙаҡ һәм етди әҙерләнгән уйында ҡатнашмай, юҡҡа көс түгәйемме ни, тим дә, шашканы һайлайым. Турнирҙарҙа уйын ҡатмарлы барһа, көткән һөҙөмтәгә өлгәшеүе ауыр булһа: "Ябай эшкә генә йөрөһәм, иртән барҙың, кис ҡайттың", - тигән уй ҙа килә башҡа. Әммә яҡындарым менән һөйләшеп, борсолоуҙарым менән уртаҡлашып, тынысланып алһам, яңынан башкөллә ятраҡан эшемә сумам.

Әгәр бала бер осорҙа шашка йә шахмат түңәрәгенә йөрөп тә, аҙаҡ был шөғөлгә ҡыҙыҡһыныуы һүрелде икән, ҡурҡынысы юҡ. Ул барыбер тормошта кәрәк буласаҡ файҙалы сифаттар йыҡторғандыр. Әйтәйек, шашка логик фекерләүҙе үҫтерә, бер нисә аҙымға алдан уйлай белеү, ҡатмарлы осраҡтарҙа дөрөҫ ҡарар ҡабул итә алыу, үҙең һайлаған өсөн яуаплылыҡты өҫтөнә алыу кеүек бик яҡшы һыҙаттар тәрбиәләй был уйындар. Ҡапыл ҡыҙыҡһыныуы һүрелде, тип атай-әсәйҙәр борсолмаһын, тип әйтмәксемен.



**Шашка менән ҡыҙыҡһынған баланан нисек чемпион яһарға? Һинән кем чемпион әүәләне һәм үрнәк алған шашкасыларың бармы?**

- Әлбиттә, тәү сиратта чемпион булыу теләге баланың үҙенән килергә тейеш. Сөнки шундайҙы ла күргән бар: бала түңәрәккә йөрөй, шулай кәрәк, тип кенә күнекмәләргә килеп ултыра һәм бошонмай ғына ваҡыт уҙғара ла, ҡайтып китә. Ә бына атай-әсәһенең, чемпион үҫтерәбеҙ, тип күҙҙәре янып тора...

Кеше күнекмәләргә күберәк ваҡыт бүлгән һайын уңыштары ла юғарыраҡ була. Бала көнөнә ике сәғәттән артыҡ шөғөлләнә алмай, ул арый. Шуға, яңы уйнай башлағанда көнөнә ярты сәғәт, шунан ике тапҡыр яртышар сәғәт шөғөлләнеү, өйҙәгеләр менән йә үҙаллы уйнау файҙалы. Быға шәп миҫал - Пань Имин исемле Ҡытай шашкасыһы. Ул ике йыл дауамында интернет ярҙамында үҙаллы шашка уйнарға өйрәнә, илдә үткән ярышта еңә һәм шунан ғына тре-

***✓ Бер баланы ғына уңышҡа йүнәлтмәй, күптәр араһынан һәләтлеләргә үҙаллы үҫеп сығырға мөмкинлек биреү зарур. "Һәләтле" тигәндә мин кешенең көслө ҡыҙыҡһыныуы һәм эшкә һәләтлелеге юғары булыуын күҙ уңында тотам.***



нерҙар уны үҙ ҡанаты аҫтына ала. 2019 йылда уҙғарылған донъя чемпионатында 2012 йылдан ғына шашка менән ҡыҙыҡһынып киткән 15 йәшлек Пань Имин күп тапҡырҙар донъя чемпионы булған Александр Георгиевтан ғына еңелеп, икенсе урын яулай. Бына шулай, маҡсат ҡуя белеү, тырышлыҡ, ынтылыш һәм... берәй конкурент булыуы кәрәк. Мәктәптә уҡығанда беҙ, өс класташ ҡыҙ, гел үҙ-ара ярыша инек. Чемпионаттарҙа мәскәүҙәр ҙә, яҡуттар ҙа кәрәк түгел ине беҙгә.

Мине еңеүҙәргә этәргән профессионалдар тураһында әйткәндә, иң беренсе тренерым - ул Әлфиә Фәхретдинова. Шунан беренсе синыфҡа уҡырға төшкәс, Александр Мельников ҡулы аҫтында тәрбиәләндем. Нәҡ ул мине ярыштарға йөрөтә башланы һәм 10 йәшлектәр араһында тәүге миҙал алыуым, уға ҡушып бүләккә шәшке тапшырыуҙары бөгөнгөләй күҙ алдымда. Һуңынан Ирек Ғәтиәтуллин, Владимир Мильшин менән дә күнекмәләр үткәрҙек. Ә 10-сы синыфҡа Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға күскәс, яңынан Александр Мельников менән эшләй башланыҡ һәм мин ҡатын-ҡыҙҙар араһында блиц дисциплинаһында донъя чемпионы титулын яуланым.

Тыштан тыныс күренһәк тә, бөтә төҫ-ҡиәфәтебеҙ менән ҡаршыла ултырған спортсыға ихтыярыбыҙҙы күрһәтергә тейешбеҙ. Миңә ҡайһы берҙә хатта ололарҙан эләгә: "Айгөл, нишләп һин шулай йомшаҡ ул!" - тиҙәр. Конкурентың һинең көслө рухыңды тойһон, өйөрмә кеүек бул, тип кәңәш тә итәләр. Ләкин ундай булырға теләгем юҡ, үҙһүҙлегем етә. Ә бына кешенең милли менталитеты уйында сағылыуы-сағылмауы тураһында тәрән уйланғаным юҡ. Шулай ҙа, юҡтыр, тип иҫәпләйем. Уйында йышыраҡ спортсының ниндәй шашка мәктәбе үтеүе сағылыш таба һәм быны уйнау стиленә ҡарап айырып була. Әйтергә кәрәк, был бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙа шулай, ә ирҙәр билдәле бер кимәлгә еткәс, айырым шөғөлләнә башлай һәм улар үҙ стилен булдыра.

**Һүҙ сыҡҡас, ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ шашкасыларҙың айырмаһы тураһында ла һөйләп кит әле...**

- Ирҙәр - көслө зат, шуға улар шашка уйынында ла һыр бирмәй, аҡыллыраҡтар ҙа, тип уйлай торғайным элегерәк. Улар ысынлап та көслөрәк уйинде. Шулай ҙа уйында ҡатын-ҡыҙҙарҙың һиҙемләй белеүе көслө: ҡайсаҡ тренерҙың "Нишләп былай йөрөмәнең, тегеләй йөрөнөң?" тигән аптыраулы һорауына "Һиҙҙем", тип кенә яуаплаған осраҡтар булғылай. Был да тәжрибәнәндер инде ул, төпкө аң ярҙам итәлер.

**Ярыш булғас, еңеүсеһе лә, еңелеүсеһе лә була. Еңелеүҙәрҙе ауыр ҡабул итәһеңме һәм үҙеңде нисек ҡулға алаһың?**

- Ҡайһы саҡта еңелһәм дә артыҡ бошонмайым, шулай булырға тейештер, тип кенә ҡуям. Ҡайһы бер еңелеүҙәр бик үкендерә, күңел тулышып китә. Залдан сығам да, илайым. Аҙаҡҡы тапҡыр донъя чемпионатында уйнағанда турнир башында уҡ еңелдем, шунан үҙемде ҡулға алып, яҡшы ғына дауам иткәйнем дә, тағы ла уңышһыҙлыҡҡа осраным. Чемпион титулына түгел, ниндәйҙер миҙалға ла өмөт итә алмауымды уйлап, ике көн ҡайғырып йөрөнөм дә, үҙемсә уйнаным да бөттөм. Уңышһыҙлыҡтарым тураһында хәбәрҙар булған әхирәтемә тәмлекәстәр төшөрөлгән фото ғына ебәрҙем: күңелһеҙләнгән саҡта бигүк файҙалы булмаған тәм-том ризыҡтар ашай торған холҡом барлығын ул яҡшы белә. Ауыр булһа, тышҡа сығып, һауа алыштырып ҡыуанып ҡабул иттек. Киләсәктә төбәктә шашка буйынса тренерҙар һаны артасаҡ, тип күҙаллана. Һәм бына шунан да мөһимерәк һөҙөмтә юҡтыр ҙа. Сөнки был массовый булырға тейешле уйын. Бер баланы ғына уңышҡа йүнәлтмәй, күптәр араһынан һәләтлеләргә үҙаллы үҫеп сығырға мөмкинлек биреү зарур. "Һәләтле" тигәндә мин кешенең көслө ҡыҙыҡһыныуы һәм эшкә һәләтлелеге юғары булыуын күҙ уңында тотам. Шашка түңәрәге ойоштороу әллә ни ҙур сығымдар, ҡиммәтле кәрәк-яраҡ талап итмәй һәм һәр ауыл мәктәбендә эшләргә теләүселәр табылһын ине.

Әлеге көндә түңәрәктә шөғөлләнмәгән, әммә шашка уйнаған һәр бала беҙ ойошторған "Чудо-шашки" ярышында ҡатнаша ала. Яҡшы һөҙөмтәгә өлгәшһә, уны үҙ ҡанаты аҫтына алырға теләүселәр табыласаҡ. Башҡортостанда Өфө һәм Ишембай ҡалаларынан тыш, Стәрлетамаҡ, Сибай, Баймаҡ ҡалалары ла шашка өлкәһендә яҡшы ғына һөҙөмтәләр күрһәтә, әүҙем йәш спортсылар бар. Шуға, республика етәксеһенең бойороғона ярашлы, төбәктә йыл һайын халыҡ-ара турнир үткәреү ҙә маҡсатҡа ярашлы буласаҡ. Шуныһы ҡыҙғаныс, быйыл ноябрҙә ойошторолорға тейеш был ярыш коронавирус эпидемияһына бәйле бер йылға кисектерелде.

Башҡортостанда бәләкәйҙән һәр бер бала шашка уйнаһа, йәш көстәрҙе табыуы еңелерәк, тигәйнем инде. Быға Рәсәйҙә шашка буйынса көслө төбәктәрҙең береһе иҫәпләнгән Саха Республикаһы

# ЫНТЫЛЫШ...

## һалынған



Һуңғы биш йылда Айнур Шәйбәков күнекмәләр үткәрә. Икебеҙ ҙә бер шашка мәктәбен үттек, гел ярыштарға бергә йөрөнөк һәм электән яҡташ, гимназиялаш, абзый кеше булараҡ миңә кәңәштәрен биреп торҙо ул. Һуңғы йылдарҙа уны остазым тип ҡабул итәм. Шулай ҙа бәләкәй саҡтағы кеүек, бер кемде лә өлгө итеп ҡуймайым һәм бер кем менән дә үҙемде сағыштырмайым. Ә шашкала тәүге аҙымдар яһай башлағанда мин Тамара Танһыҡҡужина кеүек донъя чемпионы булырға теләй инем. Хәҙер маҡсат ҡуям да, тырышам.

**Шашка ярыштарын күҙәтһәң, барыһы ла шундай тынлыҡта, үҙ уйҙарына батып, тыныс ҡына уйнап ултырғандай тойола. Ә ысынында һеҙҙең һөнәр кешеләре ниндәй? Шашкасы ҡайһы милләт кешеһе булыуына ҡарап уйын айырылырға мөмкинме?**

- Шашкасылар асыҡ күңелле. Беҙ көсөргәнешле уйын тамамланғас та әле генә ҡапма-ҡаршы көрәшеп ултырған кеше менән анализ бүлмәһенә сығып, фекер уртаҡлашабыҙ. Уйын барышында нимә уйлаған, нимә иҫәпләгән, ҡайҙа ни өсөн йөрөгән, нишләп яңынай, әммә ҡатын-ҡыҙҙар хис-тойғоға, ә улар логик фекерләүгә күберәк таянған өсөн түгел. Беҙҙе тәүҙән үк уйын барышында хис-тойғоларға бирелмәҫкә, бөтә иғтибарыңды шашка таҡтаһында тоторға, ҡаушамаҫҡа өйрәтәләр. Ни бары ҡыҙҙар араһында конкуренция әҙерәк, ә малайҙарға ниндәйҙер юғары һөҙөмтәгә өлгәшеү өсөн баштан уҡ күп көс һалырға, ваҡыт бүлергә, тырышырға кәрәк. Һәм үҫә бара бына ошо сарыф ителгән ваҡыт, тупланған белем-тәжрибә айырмаһын күҙәтәбеҙ ҙә инәм, сит илдәрҙә матур урындарҙы барып күрәм һәм былары ярҙам итмәгәндә, тәмле ризыҡ тынысландыра.

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала шашка спортын үҫтереү, быға булышлыҡ итә торған саралар күреү хаҡында указға ҡул ҡуйҙы. Ошо ыңғай ҡараш, шашка спортына иғтибар артыуы тойоламы?**

- Был ҡарар республикала оҙаҡ йылдар һүнмәй һаҡланып килгән шашка спортына иғтибарҙы арттырыр, тип бик (Яҡутстан) миҫалы дәлил. Уларҙа мәктәп уҡыусылары тотош кластары менән шашка уйнай. Мәҫәлән, әлеге мәлдә донъя чемпионы титулын йөрөткән Матрена Ноговицына белем алған Чурапча республика спорт мәктәп-интернатында эш шулай ҡуйылған: бер ваҡытта бөтә 1-се синыфтар - йөҙәрләгән бала шөғөлләнә, уларҙың ваҡыты уҙыу менән икенселәре килә. Интернатта йәшәгән балаларҙы ата-әсәләре ялдарға, хатта каникулдарға ла алып ҡайта алмаған осраҡта, буш ваҡыттарын шашка таҡтаһы артында уҙғарыуға күнегеп тә бөткәндәр. Ҡайһылары интернатҡа август аҙағында килеп урынлаша ла, май аҙағында ғына өйҙәренә ҡайтып китә, ти. Ҡыш тышҡа ла сыға алмайҙар бит инде, шашкаға ваҡыт тағы ла арта. Пандемияға тиклем яҡуттар Мәскәүгә килә лә, айҙар буйы ҡайтмай, шунан төрлө ярыштарға сығып йөрөй, бигерәк тә Голландияла уҙғарылған бихисап чемпионаттарҙа ҡатнаша торғайны. Бына шулай эшкә бүлгән ваҡыт, ярыштарҙан алған тәжрибә ваҡыты-ваҡыты менән көслө уйынсылар үҫтерә.

**Ярыштар мәлендә берәй ҡыҙыҡлы хәл-ваҡиғаларға урын бармы?**

- Өс йыл элек Африкаға барғайныҡ. Ундағы халыҡ һөйләшеп торғанда таныш булмаған кешеләргә лә ҡул менән тейергә, шәхси сиктәрҙе шулай боҙорға ярата икән. Беҙ бит улайға өйрәнмәгәнбеҙ, баштан уҡ ят күренде инде был ҡылыҡтары. Һәм бына мөһим уйын бара, бер африканлыға ҡаршы көсөргәнешле генә уйнап ултырам. Кемдер артымдан иңбашыма төртә, әйләнеп ҡарайым - берәү ҙә юҡ. Икенсе тапҡыр төрткәс, был әҙәпһеҙ әҙәмде шелтәләйем, тип боролһам - йоҙроҡ ҡәҙәре суфый синерткә (богомол) елкәмә ҡунған! Төшмәй ҙә ҡуя, ныҡ йәбешкән һәм мин тынлыҡты боҙоп, ҡысҡырып ебәрҙем. Ярай әле шундағы бер африканлы ярҙамға килеп, бөжәкте осороп ебәрҙе. Бына шундай көтмәгән хәлдәр ҙә килеп сыҡҡылай ул ҡайсаҡ.

**Әле чемпионаттарҙың ҡайһыһында еңеү яулағаның юҡ һәм яуларға теләйһең? Ғөмүмән, киләсәккә ниндәй пландар менән янаһың?**

- Әлеге ваҡытта ике айҙан Польшала үтәсәк Донъя кубогы этабына, унан һуң ойошторолған тиҙ һәм блиц программаларында донъя чемпионаттарына әҙерләнәбеҙ. Ә бер ҡасан да еңмәгән ярыштарҙы телгә алғанда, тиҙ һәм блиц дисциплиналарында юғары баһаға өлгәшһәм дә, әлегә иң мөһим титулға - классик программала донъя чемпионы булыу бәхетен татып ҡарағаным юҡ. Ике йыл элек яҡташыбыҙ Тамара Танһыҡҡужинанан ҡалышып, икенсе урын алғайным. Быйыл килеп сыҡманы һәм ике йылдан тағы үҙемде һынап ҡарау мөмкинлеген көтәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хөрмәтле гәзит уҡыусылар, шунан, серле шашка донъяһына ишектәрҙе бер аҙ аса биреберәк ҡуйҙыҡмы? Һәләтле, тимәк, үҙе әйтмешләй, ныҡышмал һәм эшһөйәр яҡташыбыҙ менән әңгәмәнән һуң һәр кем үҙендә яратҡан шөғөлөнә тоғро ҡалырға көс табыр, үҙ һөнәренең оҫтаһына әүерелеүҙе маҡсат итер, хатта шашка уйнарға ла тотонор, тигән яҡты өмөттә ҡалабыҙ. Оло йылға ла инештән башланыуын бер ваҡытта ла хәтерегеҙҙән сығармағыҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Башҡорт Ишмырҙа менән татар Мәснәүи өнһөҙ генә ҡул бирештеләр. Ниңәлер, күҙҙәрен йәшерҙеләр, шунан өндәшмәй генә икеһе ике яҡҡа китеп барҙылар.***






Ваҡыт үткәреп булмай. Магазиндарға инеп күп итеп ашарға, бөршәйеп ултырған әбейҙәрҙән ҡиммәт хаҡҡа араҡы алды. Осрашҡас, байрам итергә кәрәк бит азатлыҡты. Төнөн бында үткәрергә тура килер, автобусҡа ултырҙы ла поселоктан ситкә сығып китте. Бер тау битләүендә төшөп ҡалды, тирә-йүндә ҡарап әйләнгәс, аяҡ-ҡулдарын тарбайтып, йоҡларға ятты. Көн йылы, август айы, иркен донъяла бер туйғансы йоҡлаһын әле! Уға ҡурҡырға түгел.

Ишмырҙа оҙаҡ һәм ҡаты йоҡланы. Әммә "зэк" гәҙәтенсә иртәнге алтыла уянды. Башта аптырап торҙо, үҙенең ҡайҙа икәнен абайланы ла, тағы ашанып алды. Һай, ҡыҙыҡ икән дә ирекле тормош, ни теләһәң, шуны эшләйһең, хатта бер аҙ йәпһеҙ ҙә һымаҡ. Ниҙер етешмәй.

Бында инде башҡаса эш юҡ, ул поселокка барҙы ла яңынан колония яғына китте. Үҙе китеп бара, үҙе аптырай: сығыуын сыҡты иреккә, ә донъя ят! Бынау поселогы, урмандары, йылғаһы, машинаһы, хатта кешеләре лә. Ирекле донъя - ят, ә колония - яҡын. Ни тиклем генә хәсрәттәр кисермәһен, әле ул ошо ят донъянан үҙ төйәгенә ҡайтып барған кеше һымаҡ атлай. Унда - кешеләр. Төрләһә бар: йыртҡысы ла, арыуы ла, дуҫы ла, дошманы ла, асыҡ күңеллеһе лә, яҙалаусыһы ла, әммә ни тиһәң дә кешеләр. Бына шулар менән ике йыл ғүмерен үткәреп ташланы бит әле.

Ишмырҙа бер көн иректә, әммә моҡсайын тотоп, һаман колония алдында йөрөп ята. Эшкә килеүселәрҙең ҡайһылары аптырап, ә тоҫмөрләгәндәре йылмайып, таныш шоферҙар теләктәш ҡараш ташлап үтеп китте. Әммә береһебер һүҙ өндәшмәй - бындағы ғәҙәт, тәртип шундай.

Ниһайәт, Ишмырҙа үҙҙәренең цехына килеп йөрөй торған шоферҙы осратты. Үҙе лә аңлап тора икән. Ишмырҙаны күреү менән: "Дуҫың иртәгә сыға. Бында икәнеңде әйтермен!" - тип ҡысҡырып китте. Ишмырҙаның эсенә йылы йүгерҙе. Тағы бер көн көтөргә кәрәк тә һуң, ярай, өмөтлө булғас, эш икенсе.

Ул кире поселокка китте. Аптыраҡ: иректә төрмәләгегә ҡарағанда ла ҡыйыныраҡ һымаҡ - ваҡыт үткәреп булмай. Китап һатып алды, уҡырға күңел төшмәй, газетаһын әйләндергеләп ҡараны ла ырғытты, ваҡиғаларҙы көндәлеген көнгә белеп бармағас, бөгөнгөһө генә ҡыҙыҡ түгел. Икенсе көн инде үҙе менән өс шешә йөрөтә. Юҡ ваҡытта араҡы тип иҫе китә ине, булғас, эске килмәй. Алйот әҙәм шикелле ҡайһылайтып япа-яңғыҙың иҫереп йөрөмәк кәрәк.

Шешәгә ҡарап ҡуя ла, әбрәкәйҙә торғандарын иҫенә төшөрә. Үҙенсә күңелле ваҡыттар ине. Бөгөн ул ҡатын-ҡыҙға ла күҙ һалмай, тегеләр үҙ алдына йөрөп ятҡан тере зат ише генә күренә. Күрәһең, тормоштоң үҙ ағышымы, тәртибеме, ҡалыбымы боҙолдо, бына шуға бер нигә лә күңел төшмәйҙер, тип фәлсәфә итте Ишмырҙа. Әҙәм балаһына рәтле йәшәү өсөн ниндәйҙер ҡағыҙәләр, закондар, хатта ҡороп ҡуйылған кәртәләр кәрәктер.

Ниһайәт, бәләкәй ишек асылды ла эстән ҡулына моҡсай тотҡан кеше килеп сыҡты. Ул күҙҙәрен ялт-йолт итеп тирә-яҡҡа ҡаранды - Ишмырҙаны эҙләй. Теге шофер, дуҫың һине көтөп йөрөй, тип әйткәндер.

Быны күреп алды:

- Ишморза! - Бер йыл осрашмағандармы ни, бер-береһен ҡосаҡлап алдылар. Шунан күрештеләр, тағы ҡосаҡлаштылар, арҡаларынан ҡағыштылар, бер-береһенә ҡарашып торҙолар. Егет менән ҡыҙ осраштымы ни! Хәйер, унан да ҡәҙерлерәк, яҡынараҡ әле улар.

- Нимә булды? Ниңә улай тоттолар? - тине Ишмырҙа.

- Ах... - Мәснәүи бөтә белгән яман һүҙҙәре менән тегеләрҙе һүгергә тотондо. Ләззәтләнеп, киңәнеп һүкте: - Менә кайтыйм гына әле, Верховный Совет председателенә керәм! Кирәкләрен бирдерәм мин аларның! - Мәснәүи әллә ҡайҙа төптә ултырған төрмә башлыҡтарын һүгә, ә Ишмырҙа ошоларға ышанмай тора: ҡарасы, бер кемдән дә ҡурҡмайынса, бөтәһен дә әрләй. Хөрриәт, суверенитет тигәне ошолор!

Суҡынып китһен ул колонияһы ла, колония начальниктары ла, ярар, барыбер сыҡтылар, ҡотолдолар, мораттарына ирештеләр.

- Әлдә генә һине көтөп алынды: яңғыҙым ҡайтҡы килмәй ҙә ҡуя! - тине Ишмырҙа.

- Бу эшенне гомеремдә дә онытмам, Ишморза дус! Бик зур рәхмәт инде. Минем үземә дә бик авыр булыр иде! Что син, күз алдына китер! - Мәснәүи ласлатып колония ягына төкөрҙө лә дуҫының инбашынан ҡосаҡлап алды. - Киттек, дус, без хәзер - вольный птица!

Башҡорт Ишмырҙа менән татар Мәснәүи бик ҡәнәғәт, хатта тәкәббер ҡиәфәттә аҡрын ғына баҫып поселок яғына киттеләр.

**6**

Поезд Өфөгә иртә үк килеп етте. Бер купела икәүҙән-икәү генә барыусы таҡыр башлы әҙәмдәрҙе проводница сәғәт ярым алдан уятты. Үтеп китә күрмәһендәр, ҡотола һалайым, тигәндер. Әллә ниндәй заттар, икеһенә дүрт билет һатып алғандар ҙа, купеларына башҡа берәүҙе лә индермәйенсә, тик үҙҙәре генә киләләр. Кеше лә индермәнеләр, сығып та күренмәнеләр, купеларынан тәмәке лә, араҡы еҫе генә аңҡыны. Әйтһәң, ҡолаҡтарына элмәнеләр. Тауыш күтәрергә ҡурҡты.

Станцияға етер алдынан ул тағы асҡысы менән шаҡылдатты:

- Уфа!

Уфа икән - Уфа инде, был ике таҡыр баш, теләр-теләмәс кенә урындарынан тороп, мыштыр-мыштыр әҙерләнергә тотондо. Хәйер, әҙерләнәһе лә түгел инде, кейемендә кейеп, моҡсайҙы алдынмы, бөттө. Юлдаштарҙың кәйеф шәп түгел. Аптырарһың, Өфө тип ҡасанан бирле көттөләр, быны килеп төшкәйнеләр, тәҙрәнән дә ҡарағы килмәй.

Ә юлды күңелле үттеләр. Төрмәлә тапҡан аҡса йәл түгел, тип ашарына ла, эсеренә лә мул алғайнылар. Ҡасан тағы шундай хәл тура килә! Ҡайтҡас, бисәләре ашатыр әле, көсепкә бармағандар. Әлбиттә, ҡапыл ғына айырылышмаҫтар, Мәснәүигә төшөп, ике-өс көн ҡунаҡ булырҙар, бер көн баҡсаһына барып ятырҙар, шунан дуҫының мәрйә бисәһен алып, Баймаҡ китерҙәр. Шулай килештеләр. Мәснәүи, минең өй иркен, бер аҙна ят, тигәйне лә, Ишмырҙа, килешмәҫ, бисә асыуланыр, тине.

Ғөмүмән, үҙҙәренең ҡайтып төшөүе Өфө өсөн бер оло ваҡиғаға әйләнер һымаҡ ине Ишмырҙаға. Оркестр менән ҡаршыламаһалар ҙа, перронда сәскәләр, күстәнәстәр тотоп ҡаршыларҙар. Баймаҡтан да килерҙәр. Азатлыҡ өсөн ғазап сигеп йөрөүселәр ҙә инде - революционерҙар! Төшкәс, ҡосаҡлашып күрешерҙәр, хәләхүәл белешерҙәр, шунан әҙәм аптыратып, ялтыр машиналарға ултырып сығып китерҙәр. Мәснәүи ни уйлағандыр, Себер киңлектәрен ҡарап, күтәренке күңел менән килгәндә башҡорт Ишмырҙа ошолай күҙ алдына килтерҙе үҙҙәренең тыуған ил менән осрашыуын.

Поезд туҡтаны. Ысынлап та йоҡлап ҡала күрмәгеҙ, тигәндәй, вагондар ҡапыл быларҙы һелкетә биреп, туҡтаны. Ашығаһы түгел, берәү ҙә көтмәй уларҙы, хәбәр итеп торманылар. Уның ҡайғыһы ла булманы, туйҙан ҡайтып килмәйҙәр.

Былар вагондан аҙаҡҡы булып төштө. Ергә баҫҡас, ҡояшҡа күҙҙәре сағылғандай, йөҙҙәрен йыйырып, тирә-яҡҡа ҡарандылар. Ишмырҙа проводницаға рәхмәт әйтеп хушлашҡан булды, ә теге ерәнгән ҡиәфәт менәп ситкә боролдо. Ай, суҡынһын! Ике байгош, тоҡсайҙарын тотоп, аҡрын ғына перрон буйлап киттеләр.

Өфө - һаман да шул Өфө, станцияһы ла шул уҡ, һәр кемдең үҙ хәсиәте, береһе ашыға, береһе көлә, береһе ҡосаҡлаша, тигәндәй. Башҡа халыҡ шулай, тик быларҙың ғына кәйефе юҡ, һәр ҡыбырлаған нәмәгә асыуҙары килә.

"Подельник" дуҫтар бөгөн һөйләшмәйҙәр, урман януарҙары шикелле, күҙҙәре менән генә аңлашалар.

Бына һыу эҙләп киттеләр. Алдан - Мәснәүи, артынан ҡара күҙҙәренән асыу сәсеп Ишмырҙа килә. Ауыҙ кипкән, ирендәр бер-береһенә йәбешкән, һөйләшеү түгел, асырлыҡ та рәт юҡ.

Әмәлгә ҡалғандай, һыуҙың әҫәре лә күренмәй. Әллә бик иртә булғанға килтереп еткермәгәндәр, әллә, ғөмүмән, һатмайҙар, уләм тиһәң, тамсы һыу юҡ. Бер ерҙә автомат эшләй, уға Ленин мавзолейындағы һымаҡ сират.

Мәснәүи төрмәләш дуҫын туалетҡа алып килде. Бында ла уңманылар, ишеккә "Уборка!" тигән яҙыу эленгән. Әммә күҙе тонған Мәснәүи яҙыуға иғтибар итмәне, ишекте асты. Хужаһы яҡын ғына йөрөгән икән, ажғырып килеп тә етте:

- Не видишь что ли, уборка!

- Мамаша, нам только попить. - Теге һеперткеһен күтәрҙе:

- Дам я вам попить! Что вам здесь, ресторан! - Вокзал кешеләре уҫал була инде, телгә аптырамай.

Мәснәүиҙең зәңгәр күҙҙәре ҡурҡыныс йылтыраны:

- Ты, мамаша, потише! Мы только освободились! - Шулай тине лә эскә инеп китте. Ишмырҙа шым ғына артынан эйәрҙе. Бер йотом һыу өсөн башты һалырға ла була.

Былар инделәр ҙә, ҡулдыниҙе йыуып тормайынса, һөмәктәрҙе астылар ҙа услап эсергә тотондолар. Әммә былай ғына туйырлыҡ түгел, ахырҙа, теге ваҡыт шешәнән имгән шикелле, һөмәктең үҙенән эсә башланылар.

Эсеп туйғандай ҙа итмәнеләр, алдарында милиционер пәйҙә булды:

- Что вы делаете, граждане?

Суҫҡа, теге ҡатын әйткәндер инде! Ух, ошо ваҡыт Мәснәүиҙең күҙен күрһәгеҙ! Этҡә ташланырға торған бесәйме ни!

- Не видишь, что делаем?!

Әммә милиционер көс үҙендә икәнен белә, вокзалда бындайҙар йыш осрай, тыныс ҡына итеп:

- Ваши документы? - тине.

- На! - Мәснәүи түш кеҫәһенән ҡағыҙ сығарҙы. Ишмырҙа шым ғына бирҙе.

- Чыккансыз икән, тизерәк ычкыныгыз, йөрмәгез монда адәм куркытып! - Милиционер татар булып сыҡты.

Мәснәүи һеләүһенгә әүерелде лә ҡуйҙы:

- Хәҙер!..

- Мәснәүи, әйҙә киттек! - Ишмырҙа уны еңенән тарта һалды. Ә теге ярһыуынан һүҙ ҙә әйтә алмай ине.

Ирекле заттар вокзал алдына сыҡты. Шаҡ ҡатҡанға юл ҡайҙа, тигәндәй, бер аҙ ҡаранып торҙолар. Сәйер, донъя геү килә, ә был икәүҙең күңелдәре буп-буш.

- Безгә барсак инде, бик ерак, диярсең... Мин Машиностроительный артында торам, - тине Мәснәүи. - Хатын да өйдә юктыр инде...

- Юҡ, хәҙер үк билетка баҫам. Йәй беҙҙең Сибай поезына кеше күп була, - тине Ишмырҙа.

- Бәлки, билет алгач, килеп чыгарсың. Поезың кич китә, дисең бит?

- Ярар, ҡарармын.

Тағы бер аҙ торҙолар. Былай ғына айырылышыу уңайһыҙ һымаҡ, әммә төрмә дуҫлығының тамам, ә кисәге һөйләшеүҙәр, бирген вәғәҙәләрҙең эскәндә һөйләшкән һүҙ генә икәнлеген, хәҙер үҙҙәре алдында ҡәҙимге, шулай ҙа бер аҙ ятая төшкән тормош торғанлығын икеһе лә аңлай ине.

- Ярар, Ишморза дус, без гәйбә алайса. Уфага килә-нитә калсаң, төш безгә. Хатының белән кил, сөйләшеп утырырбыз.

- Йөрөп ятыла бит инде, бәлки, килеп тә сығылыр әле. Баяғы, Баймаҡ яғына юл төшһә, ҡаңғырып йөрөмә, тура беҙгә кил дә ин. Ауылдың исемен беләһең.

- Что син, әбизәтелно!

- Ярар, Мәснәүи, имен ҡайтып ет, ҡатыныңа сәләм әйт!

- Ладно, давай!

Башҡорт Ишмырҙа менән татар Мәснәүи өнһеҙ генә ҡул бирештеләр. Ниңәлер, күҙҙәрен йәшерҙеләр, шунан өндәшмәй генә икеһе ике яҡҡа китеп барҙылар.

*1991-1992 йылдар.*

**(Аҙағы. Башы 38-43-сө һандарҙа).**

✓ *Ғүмәрҙә йәшәүсе Ғәйнислам олатайҙың бер-бер артлы ике ейәне тыуа. Беренһенә Филүс, ә икенсеһенә Динис тип исем ҡушалар. Күршеләре ейәндәренең исемен һорағас, олатай: "Береһе - Плюс, икенсеһе - Минус", - тип яуаплаған.*



БАШҠОРТ ЮМОРЫ

# БАЙМАҠ МӘҘӘКТӘРЕ

## ҒҮМӘР АУЫЛЫ ЛАҠАПТАРЫ

### Ҡуян бесән ашаймы?

Шәрифулла атлы кеше тәүге тапҡыр ҡуяндың бесән ашағанын күргән дә, их-лас аптыраған:

- Аһ-аһ, ҡуян да бесән ашай икән! - тигән.

Быны ишетеп торған күршеһе был һүҙҙе элеп алып, ауылға таратып та ебәргән.

Хәҙер Ғүмәр ауылы халҡы берәй нә-мәгә аптыраһа:

- Аһ-аһ, ҡуян да бесән ашай икән! - тип әйтергә ярата.

Ҡуяндың бесән ашауы аптырау билге-һе булғас, бүренең ҡуянды ашауын ғүмәрҙәр нимәгә тиңләй икән?

### Ике сите миңле

Бер Ғүмәр кешеһе ауылдаштарына ошондай йомаҡ ҡуйған:

- Ике сите миңле, уртаһы - Биби.

Оҙаҡ баш ватҡан ауылдаштары. Әммә йомаҡтың яуабын таба алмаған. Баҡ-тиһәң, йомаҡ ҡуйоусы Бибикамалдың ике яҡ күршеһе Миңлеямал менән Миң-лениса инәйҙәрҙе күҙ уңында тотҡан икән.

### Бер кило оя

Ғүмәр ауылынан ике малайҙы атаһы Баймаҡҡа магазинға сөй алырға ебәргән. Малайҙар Баймаҡҡа барып еткәнсе сөй-ҙөң руссаһын онотҡан. Береһе шунда ҡапыл ғына:

- Дайте килограмм гнездо! - тип һорап ҡуйған.

Хәҙер Ғүмәрҙә сөйҙө "оя" тип йөрөтә-ләр.

### Миңлеүәли, Арафис...

Алла Пугачеваның "Миллион алых роз" йырының яңы сыҡҡан популяр мәле була. Даниял исемле малай был йы-рҙы тыңлағас, Рәфис ағаһына былай тигән:

- Ағай, Миңлеүәли ағайым менән һи-нең турала йыр сығарғандар.

- Ниндәй йыр һуң ул?

- Миңлеүәли, Миңлеүәли, Миңлеүәли Арафис! - тип йырлап ебәргән малай. Хәҙер ҙә йырҙы Ғүмәрҙәр ошолай үҙгәр-теп йырлай.

### Прощай, Гөлсирә!

Ғүмәр егете Миңлеүәли Беренсе Эткол ауылындағы һөйгән ҡыҙы менән үпкәлә-шеп киткән дә:

- Прощай, Гөлсирә! - тип ҡайтып кит-кән.

Хәҙер ғүмәрҙәр үпкәләшһәләр, бер-бе-реһенә "Прощай, Гөлсирә!" тиҙәр. Улар Сыңғыҙ Айтматовтың иждадын яҡшы беләә.

### Плюс-Минус

Ғүмәрҙә йәшәүсе Ғәйнислам олатай-ҙың бер-бер артлы ике ейәне тыуа. Бере-һенә Филүс, ә икенсеһенә Динис тип исем ҡушалар. Күршеләре ейәндәренең исемен һорағас, олатай:

- Береһе - Плюс, икенсеһе - Минус, - тип яуаплаған

Хәҙер ҙә Филүс, Динис исемле малайҙ-арҙы Плюс, Минус тип мәрәкәләргә яраталар.

## ЯРАТ АУЫЛЫ ЛАҠАПТАРЫ

### Кеше ҡолағас...

Яратта Ильяс исемле бер ҡыҙыҡ кеше йәшәй.

Бер көндө ул ауылдаштарын арбаға ул-тыртып алып, бесәнгә китә. Берҙән-бер ризыҡтары ҡатыҡ була. Бер ауыш урын-да арба ҡыйшайып китеп, бөтәһенең дә ҡатыҡтары түгелә. Ильястыҡы ғына тү-гелмәй ҡала. Шул ваҡыт Ильяс үҙе лә эләгеп ҡолап киткән кеше булып, ҡаты-ғын түккән.

- Һуң, Ильяс, нишләп улайттың инде, исмаһам, һинең ҡатыҡыңды эсер инек, - тигән башҡалар.

- Әллә, кеше ҡолағас, мин дә ҡоланым, - тип яуаплаған ул.

Шунан алып Яратта кешеләр күмәклә-шеп берәй эшкә тотонһа (картуф алырға, бесән сабырға, урам таҙаларға һ.б.), кеше ҡолағанда ҡолап ҡалырға кәрәк, тип башҡалары ла йәһәтләй башлай.

### Балалар булыр әле...

Бер көндө Ильяс олатай әбейен һәм балаларын алып, мотоцикл менән бесән-гә барған. Әлеге лә баяғы айыу үкергән бит. Ильяс олатай тиҙ генә мотоциклын тоҡандырған да:

- Фәрзәнә, ултыр! - тип ҡысҡырған. Фәрзәнә инәй:

- Ә балалар? - тип аптырап ҡалған. Ильяс олатай быға:

- Ултыр, Фәрзәнә, балалар булыр әле! - тип яуап биргән, имеш.

Шунан алып Ярат ирҙәре бесәндән ҡайтырға ҡабаланһалар, ҡатындарын:

"Ултыр, балалар булыр әле", - тип мәрәкәләп ҡабаландыра икән.

### Ишектең тишеге

Миңлегәле олатай килене Шәмсинур инәйгә ҡунаҡҡа барған. Ҡунаҡ бөтөп, ҡайтырға ваҡыт еткәс, ишек төбөндә торған шифоньерҙың көҙгөһөн ҡулы ме-нән һыйпаған-һыйпаған, әткеләгән дә:

- Килен, ишегеңдең тишеге ҡайҙа? - тип һораған, имеш. Был мәрәкә хәҙер ҙә "ишегеңдең тишеге" тигән формала ҡул-ланыла.

### Һауын һыйыры түгел...

Ғәҙелшин Марат ағай колхозда заправ-калаусы булып эшләгән ваҡыт. Уңыш йыйыу мәлендә районнан палнамуш килгән. Баҫыуҙар буйлап йөрөй торғас, машинаһының бензины бөткән быныҡ. Колхоздың заправкаһына килһә, Марат ағай:

- Ҡағыҙ алып килмәйенсә, бензин бирмәйем, колхоз вам не дойная корова, - тип кенә ебәргән. Палнамуш партком Үрнәк Хәйретдин улы менән бергә ки-леп, саҡ-саҡ машинаһына бензин ҡойҙ-ороп алған.

Шунан алып колхоздан һоранып йөрөгән кешегә: "Колхоз вам не дойная корова!" - тип яуапларға ярталар Ярат-та.

### Тупҡа тибегеҙ...

Һабантуй бара. Ике ауыл йәштәре (Ғүмәр, Ярат) футбол уйнай. Көндәр ҡо-ро булғанлыҡтан, футбол яланында саң борлап тора, футболсылар ҡап-ҡара бу-лып бөткән. Шул саҡ судья Фәрит ағай ҡысҡыра икән:

- Егеттә-ә-әр, тупҡа тибергә тырышы-ғыҙ, тупҡа-а-а!

Был шул тиклем көлкө килеп сыҡҡан, хатта хәҙер ҙә егеттәр футбол уйнарға сыҡһа: "Тупҡа тибергә тырышығыҙ ин-де, егеттәр!", - тип мәрәкәләшәләр.

### Һарыҡ инәйме?

Гөлзифа исемле ике йәш ярымлыҡ ҡыҙ әсәһенән күрше инәһенең исемен һорай. Әсәһе: "Рәсилә", - ти. Бала әйтә алмай. Әсә ижекләп өйрәтә:

- Рә-Рәс..

Бала: Рәс-рәс-бәрәс инәй тип һамаҡ-лай.

Бер аҙ йөрөй биргәс, тағы килә лә:

- Әсәй, инәйҙең исемен оноттом да ҡуйҙым. Һарыҡ инәйме әле? - тип һорай.

## СЫҢҒЫҘ АУЫЛЫ ЛАҠАПТАРЫ

### Әрәм булған йомортҡа

Бер ваҡыт Искәндәр олатай ҡунаҡ саҡырған. Саҡырылған ҡунаҡтары ни сәбәптәндер һуңлап килгән. Барып ин-һәләр, Искәндәр олатай:

- Ныу, Әхмәтхажи, былай һуңларыңды белһәм, тауығымды йомортҡа һалғас са-лыр инем. Йомортҡа ла һалдырмай са-лып әрәм иттем бит, - тип мәрәкәләй икән. Шунан алып Сыңғыҙҙа "Ҡунаҡҡа ваҡытында килһәңме, әллә тауығымды йомортҡа һалдырып салайыммы?" - тип шаярталар.

### Партбилетың өйҙәме?

Бесән мәле. Әхмәтовтар кәбән ҡоя. Ике кәбән бесәнде ҡойоп бөткәс, Әхмәт-хажи ҡапыл партбилетын иҫкә төшөрә лә эҙләй башлай: "Ошонда ғына ята ине, ошонда ғына ята ине", - тип түш кеҫәһен ҡапшай ул. Тирә-йүндә эҙләп бөтәләр. Тапмағас, Әхмәтхажи кәбәндәрҙе ҡутар-тырға була. Арыған кешеләр ҡутарырға теләмәй. "Моғайын, өйҙә ҡалғандыр партбилетың", - тиҙәр. Шулай ҙа ай-вай-ҙарына ҡуймай, ике кәбәнде лә аҡланға тараттырып ташлап, партбилетын эҙләтә ул. Әммә партбилет табылмай. Кәбән-дәрҙе кире ҡойоп, өйгә ҡайтҡас, партби-леттың ысынлап та өйҙә ҡалғаны асыҡ-лана. Хәҙер кәбән ҡойор алдынан: "Партбилетың өйҙәме?" - тип һорай һа-лалар.

### Күбәләрҙе урынына ҡуй

Мөхтәр исемле ир бер көндө бесәнгә бармай өйҙә ҡалған. Бесәнгә киткән ҡа-тыны яйы сыҡҡанда бригада техникаһы-ын файҙаланып, кәбән ҡойҙорған ти. Иртәгәһен бесәнгә килгән ир үҙе булма-ғанда кәбәндең ҡойҙоролоп ҡуйыуына ғәрләнеп:

- Минһеҙ кәбән ҡойоп ни, күбәләрҙе урынына ҡуй! - тип болара икән. Хәҙер Сыңғыҙҙа кәбән ҡойор алдынан: "Хужа бындамы? Күбәләрҙе кире урынына ҡуй-ырға тура килмәһен !" - тип шаярталар.

### Колхоздыҡымы, Азаматтыҡымы?

Соҡор ерҙә арбаһы ҡыйшайып, трак-торҙан бер рулон бесән төшөп китә. Бе-сән хужаһы тракторҙан төшә лә, рулонға: "Теймәгеҙ, Азаматтыҡы", - тигән яҙыу ҡыҫтырып ҡуя.

Арттан килгән тракторсы, әлбиттә, был бесәнде төшөп ҡарай, бәлки, ҡута-рып һалып алырға уйлайҙыр. Тик яҙыу-ҙы күргәс, бесәнгә теймәй, ә эргәһенә: "Алдай, колхоздыҡы!", - тип яҙып китә. Был лаҡап ауылда "Колхоздыҡымы, әллә Азаматтыҡымы?" формаһында ҡуллан-ыла.

### Таң аттымы?

Бесән ваҡытында ҡыуышта йоҡлап ҡалған Мортаза һәм Әхмәтхажи исемле бабайҙар һөйләшә:

- Мортаза, таң аттымы?

- Юҡ, шарт итмәне әле.

- Таң беленмәйме, тием.

- Беленһә, беленәләр, һәрмәп ҡарама-ным әле.

### Һайғау менән туҡтатайыҡмы?

Борхан исемле олатай мотоцикл һатып алған. Мотоциклды ҡабыҙып, быны ул-тыртып сығарып ебәргәндәр, ә нисек туҡтарға өйрәтмәгәндәр икән. Ауылды бер урап килеп, ишек алдында туҡтайым тиһә, туҡтай алмай, ихатаны бер итеп урап тик йөрөй, ти. Аптырағас, ул:

- Тотоғоҙ, тотоғоҙ! Неужели тота ал-майһығыҙ? - тип ҡысҡырған. Аҙаҡ:

- Һайғау менән булһа ла туҡтатығыҙ! - тип инәлә башлаған. Хәҙер ауылда яңы техника алған кешегә: "Һайғау менән туҡтатайыҡмы, әллә үҙең туҡтай белә-һеңме?" - тип мәрәкәләйҙәр.

### Иптәштәргә әйтелгән...

Ибраһим исемле бригадир ағайға бе-рәй йомош менән килһәләр, йәки тәҡ-дим индерһәләр: "Иптәштәргә әйтелгән, эшләрҙәр", - тип яуапларға яратҡан. Хат-та бер мәл колхоздың ашнаҡсыһы: "Йәй көнө тышта аш бешерә торған усаҡты һыйырҙар килеп емерә лә китә, кәртәләп булмаҫмы?" - тип үтенгәс, ул: "Иптәш-тәргә әйтелгән, емермәҫтәр", - ти икән.

Шунан алып, Сыңғыҙҙа берәй эште эшләү тураһында һүҙ ҡуҙғатҡан кешегә: "Иптәштәргә әйтелгән, эшләрҙәр", - тип мәрәкәләйҙәр, йәки: "Иптәштәргә әйтел-гән..." - тип кенә ҡуялар. Бөтәһе лә аң-лай.

### Беҙ ҡайтырбыҙ. Али Карнай.

Бер мәл китап уҡыу модаға инеп кит-кән замандар булған. Ауыл халҡы китап-ханаға йыш йөрөгән. Шул ваҡыттарҙан түбәндәге лаҡаптар тороп ҡалған:

Егеттәр армияға киткәндә, автобустан ҡул болғап:

- Беҙ ҡайтырбыҙ! Али Карнай! - тип ҡысҡырған бер шаяны.

Хәҙер ҙә Сыңғыҙҙа берәй яҡҡа юлға сыҡһалар: "Беҙ ҡайтырбыҙ! Али Кар-най!" - тип әйтәләр. Армияға китеүселәр мотлаҡ шулай әйтә.

### Один чай...

Етмешенсе йылдарҙа Сыңғыҙ ауылы-нан 14 йәшлек 7 малайҙы военкоматҡа саҡырғандар. Төшкө ашҡа ашханаға ин-гәс, беренсе, икенсе блюдоларҙы алып килгәндәр ҙә, сәй алырға Мәүлетбайҙы ебәргәндәр. Мәүлетбай русса 7 стакан сәйҙе нисек һорап алырға белмәй, апты-раның торған да: "Один чай, один чай... один чай", - тип 7 тапҡыр әйткән.

Хәҙер Сыңғыҙҙар ашханаға инһәләр: "Один чай, один чай..." - тип шаярырға ярата.

### Тарихтары билдәле булмаған лаҡаптар

Ҡайһы бер лаҡаптарҙың теүәл генә та-рихын һөйләүсе кеше табылманы. Ула-рҙы беҙ айырым төркөмгә индерҙек.

1. Һин, мин, Насип, Ғәбиҙә (берәй ҙур эште әҙ кеше башҡарырға кәрәк булған-да әйтәләр).

2. Ҡәҙер итһән, Рауил да ҡайнаға (алыҫ туғандар тураһында әйтелә: ҡоҙа, ҡоҙаса һ.б.).

3. Ҡуйсы-ҡуйсы, ҡайнаға (берәй эште эшләргә йыбанғанда әйтәләр).

4. Ҡаңғырма, Мәрфуға (берәй кеше ныҡ ҡаңғыра башлағанда әйтәләр).

5. Тсс, Алсыу бейей! (Тауышланмағыҙ, тигән мәғәнәлә).

6. Домой, Гәйшә (әйҙә, ҡайттыҡ тигән мәғәнәлә).

7. Ҡалаҡ бирһәң, бесәйҙең башына һу-ғыр инем (ҡунаҡта берәйһенә ҡалаҡ ет-мәһә, шулайтып һорап алалар).

8. Что һин, Аҡназар (берәй хәбәргә ышанмағанда әйтәләр).

**Миләүшә ЮЛДАШБАЕВА, уҡытыусы. Баймаҡ районы Ярат ауылы.**

✓ *Шәжәрәмде төҙөгәс, атай-олатайҙарымдың башҡорттар: атайым яғынан - тамъяндар, әсәйем яғынан ҡырғыҙ ырыуы башҡорттарынан булыуын асыҡланым. Улар ҡасан татарға әйләнгән? Ғөмүмән, кемдәр улар татарҙар?*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# КИРЕ ТОЙҒОЛАР...

■ Кире эмоциялар сәләмәтлек өсөн зыянлы. Улар иммун системаһының һаҡланыу көсөн кәметә, төрлө сирҙәргә алып килә. Был турала Австралия ғалимдарының тикшеренеүҙәре күрһәтә. Иң хәүефле тойғолар булып һаранлыҡ, көнләшеү, үҙеңде йәлләү тора. Һаранлыҡ ашҡаҙан-эсәк тракты ауырыуҙарына килтерә, көнләшеү ҡайһы бер гормондарҙың, мәсәлән, тестостерондың бүленеп сығыуын тотҡарлай. Башҡаларҙың уңышына шатлана белмәү инфаркт хәүефен үҫтерә. Үҙеңде йәлләү һөҙөмтәһендә ацетилхолин гормоны күберәк бүленә, ул бауыр сирҙәренә килтереүе бар. Бындай кешеләрҙең ҡанында шәкәр кимәле түбән була, аш һеңдереү боҙола. Шулай уҡ үҙеңде гел гәйепле тойоу ҙа насар. Шулай итеп иммунитетығыҙҙы ҡаҡшатаһығыҙ, хатта онкологик сирҙәр барлыҡҡа килеүе ихтимал.

■ Йырлау - яҡшы кәйеф һәм шатлыҡ билдәһе булараҡ ҡабул ителә. Әммә бар кеше лә ҡысҡырып йырларға ҡыймай. Ғалимдар әйтеүенсә, йырлауҙың файҙаһы бик ҙур. Был ваҡытта эндорфин - "бәхет гормоны" бүленеп сыға. Шулай уҡ ҡысҡырып бер йырлаһаң, стресс булдырмай торған гормон - окситоцин бүленә. Ул кешене тынысландыра, депрессияны еңергә ярҙам итә. Йырлаған саҡта йөрәк ритмы яҡшыра, хатта ҡорһаҡ һәм диафрагма мускулдарын нығыта. Кем көҙгә алдына тороп, үҙен сәхнәләмен, тип хис итеп йырлай, улар икеләтә ота, ти белгестәр. Был оялсанлыҡты еңергә ярҙам итә. Үпкәләрҙе нығытам тиһәгеҙ, шулай уҡ йырлағыҙ. Йырлағанда дөрөҫ итеп тын ала башлаясаҡһығыҙ, тимәк, яҡшыраҡ йоҡлаясаҡһығыҙ ҙа. Иммунитетты нисек нығытырға белмәһәгеҙ, йырлағыҙ, тип кәңәш итәбеҙ. Йырлаған мәлдә А-иммуноглобулины кимәле күтәрелә, тип раҫлай инглиз ғалимдары. Шуға ла витаминдарға бай емеш-еләкте йырлай-йырлай ашағыҙ. Йырлау баш мейеһен үҫтерә, хәтерҙе нығыта.

■ Гүзәл затҡа бәйле тағы бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт. Британияның St.Tropez косметик фирмаһы хеҙмәткәрҙәре ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлегеләге өсөн аҙнаның иң ауыр көнөн асыҡлаған. 2000 ҡатын-ҡыҙ араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, дүшәмбе гүзәл заттарҙың күпселек өлөшө үҙен ҡартайған тип тоя. Быға ял көндәре сәбәпсе, ти белгестәр, сөнки был көндәрҙә һуң йоҡларға ятабыҙ, әүҙем ял итеп арыйбыҙ. Шулай ҙа иң ауыр көн булып шаршамбы тора, сөнки был ваҡытҡа эштәге стресс та ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлегенә насар тәьҫир итеп өлгөрә. Шаршамбы 15.00-16.00 сәғәткә ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөҙөндә һырҙар күберәк күренә. Аҙнаның иң яҡшы көнө булып йома иҫәпләнә. Эш аҙнаһы аҙағына ҡатын-ҡыҙҙарҙың 60 проценты үҙен сикһеҙ бәхетле тоя икән.

■ Яланда үҫкән аҡ сәскә стресс, нервы көсөргәнеше һәм хәүеф тойғоһонан ҡотолорға ярҙам итә. Ул хатта химик юл менән яһалған ҡиммәтле тынысландырыусы дарыуҙарҙы ла алыштыра ала. Аҡ сәскәнең файҙалы яҡтарын АҠШ-та тикшереп ҡарағандар. Эксперимент барышында аҡ сәскә төнәтмәһе ҡулланыусылар стресс һәм хәүеф тойғоһонан тулыһынса арына алған. Аҡ сәскә төнәтмәһе сәләмәтлеккә зыян килтермәй генә йоҡоһоҙлоҡтан дауалай, шулай уҡ артыҡ әүҙем балаларҙы тынысландырырға ярҙам итә.

*БӨТӘ РӘСӘЙ ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ - 2020*

# БЕҘ - БАШҠОРТТАР

## МИЛЛӘТЕМДЕ ҠАЙТАРҘЫМ...




**Һуңғы йылдарҙа мәғлүмәти киңлектә Альберт Исмаил исеме йыш яңғырай. Башҡортостанда тыуып үҫкән, быға тиклем Татарстанда йәшәгән, татар милли хәрәкәтенең әүҙем ағзаһы булған музыкант үҙен башҡорт тип иғлан иткәс, уны милләтен алмаштырыуҙа ла, сәйәси уйындар уйнауҙа ла гәйепләнеләр. Әммә Альберт Әҙип улы был хәлдә аптырарлыҡ бер ғәмәл дә күрмәй һәм бер ниндәй ҙә милләт алмаштырыу юҡ, тип билдәләй.**

- Милләт алмаштырыу юҡ һәм булманы ла, - ти Альберт Исмаил. - Әҙмә-әҙлекле итеп аңлатҡанда, төрөктәрҙә бер мәҡәл бар: "Әгәр бушлыҡ күрһәң, уны тултыр". Мин 1995 йылда Ҡаҙанға килдем һәм бер йылдан Татар дәүләт гуманитар институтына уҡырға индем. Студент тормошон бик актив булды. Минең татар телле ижадым тап шул саҡта башланды. Ҙур булмаған төркөм өсөн кәрәкле, замандың иң көнүҙәк темаларына, мәсәлән, тарих, хәтер көнө, Чечнялағы һуғыш, наркотиктар проблемаһына арналған йырҙар яҙҙым. Милләт, тарих, мәҙәниәт хаҡындағы бәхәстәр ҙә иғтибарымды үҙенә йәлеп итә ине. Барлыҡ был бәхәстәрҙә һәр саҡ дәлилдәр етмәй икәнен тойомлай инем. Тәржемәсе булараҡ, минә бик күп тарихи материалдарҙы тәржемә итергә тура килде, был минең тарих һәм мәҙәниәт буйынса белемемде һиҙелерлек тулыландырҙы. Мин тарихтың тулыһынса фактарҙы констатациялау түгел, ә күбеһенсә уйҙырма булыуын аңлай башланым. Бер ваҡыт шәжәрәләр нигеҙендә ваҡиғаларҙы тарихи күҙлектән аңлатыу шаһиты булдым һәм был тап миңә кәрәк нәмә икәнен аңланым.

Йәшермәйем, шәжәрә төҙөү енел булманы. Был эш менән оҙаҡ йылдар шөғөлләнеүселәр тәжрибәһе менән уртаҡлашырға бик теләмәй, барыһын да үҙемә аңларға тура килде. Шәжәрәмде төҙөгәс, атай-олатайҙарымдың башҡорттар: атайым яғынан - тамъяндар, әсәйем яғынан ҡырғыҙ ырыуы башҡорттарынан булыуын асыҡланым. Шунда тыныслыҡ таптым, сөнки бик мөһим һорауға яуап алдым. Мине "милләт алмаштырыуҙа" гәйепләгән ҡайһы бер "аналитиктарҙың" адекват булмаған реакцияһынан һуң тикшеренеүемде артабан дауам итергә булдым. Сөнки милләтемде асыҡлау икенсе һорауҙар тыуҙырҙы: "Атай-олатайҙарым ҡасан татарға әйләнгән? Ғөмүмән, кемдәр улар татарҙар?" Бында бары тик беҙҙең Туймазы районы "татарҙары" турала ғына һүҙ алып барам: 1917 йылға тиклем үҙатама булараҡ бер генә татар тигән этнонимды ла тапманым. Һығымта күҙ алдында: районыбыҙҙа йәшәгән күп кенә халыҡ башҡорт, мишәр, нуғай, сыуаш, мари сығышлы. Йәғни мин милләт алмаштырманым, ә уны кире ҡайтарҙым.

Эйе, көнбайыш башҡорттарының телен ҡайһы берәүҙәр башҡорт теленең диалекты тип түгел, ә татар теле тип ҡабул итә ине. Хәҙер хәл-торош шундай. Ҡайһы берәүҙәр үҙен башҡорт, әммә саҡ ҡына "башҡараҡ" тип иҫәпләй. Был ТАССР идеологтарының күп йыллыҡ пропагандаһы һәм БАССР яғынан төньяҡ-көнбайыш һәм көнбайыш төбәк башҡорттарына ҡарата йомшаҡ сәйәсәте һөҙөмтәһе. Төньяҡ-көнбайыш районтарҙы бүленмәҫ башҡорт парадигмаһына индереү мәсьәләһе бер ваҡытта ла тынғаны юҡ. Быны беҙ ғалим-лингвистарҙың хеҙмәтендә лә күрәбеҙ. Был мәсьәләләр 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу алдынан да күтәрелә: Д. Исхаҡов, М. Әхмәтйәнов һәм улар кеүек татар идеологтарының Башҡортостандың көнбайыш өлөшөндә татар һөйләштәре, башҡорт милләтенең булмауы, "ысын" башҡорттарҙың көнсығышҡа миграцияһы, мишәрҙәрҙең башҡорт булып яҙылыуы, башҡорттарҙың ҡатлам ғына булыуы һ.б. турәһындағы нигеҙһеҙ раҫлауы быға сәбәп була. Беҙҙең диалект, ысынлап та, айырылып тора. Бында мин бер ниндәй ҙә ғәҙәттән тыш нәмә күрмәйем. Диалектыбыҙ күптән инде ғилми донъяла яҙылған һәм раҫланған. Эволюция йәһәтенән ул иҫке башҡорт теленә яҡын һәм фонетикала, грамматикала һәм лексикала архаик формаға эйә. Һәм башҡорт теле берҙән-бер миҫал түгел. Дари теле, мәсәлән, хәҙерге фарсы теленә ҡарата тағы ла боронғораҡ. Норвег теленең "бук моль" рәсми диалекты әҙәби телдән боронғораҡ. Беҙҙең диалект әҙәби татар теленә яҡын, әммә ул уны татар теле тип атарға сәбәп түгел. Минең һөйләшем минә атайымдан күскән, уға - ул заманда Татарстан да, Башҡортостан да проектта ла булмағанда тыуған олатаһынан.

Мин әҙәби башҡорт телен яҡшы аңлайым һәм хөрмәт итәм, әммә ышаныслы итеп һөйләшә алмайым. Киләсәктә был бушлыҡты тултырырмын тип уйлайым. Был - берен-

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ЙӨРӘК ХӘЛЕҢ, ИМАНЫҢ...

## камил булһын



**Имандың юғары кимәлгә етеүе һөҙөмтәһе - тәҡүәлектер. Аллаһы Тәғәләгә һөйөү һәм ышанысы шул тиклем көслө булған иманлы кеше һәр хәрәкәтендә ошо ныҡлы бәйләнеште өҙөүҙән, Аллаһы Тәғәләнең уның ғәмәлдәренән ҡәнәғәтһеҙ булыуынан ҡурҡа.**

Әнәс тигән сәхәбә һөйләй: "Бер көндө Мөхәммәт бәйғәмбәргә бер сәхәбә килде һәм "Эй, Аллаһ Рәсүле! Кем Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ғаиләһе һәм йорт вәкиле булып иҫәпләнә?" - тип һораны. Бәйғәмбәребеҙ: "Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ғаиләһе, уның яҡындары - Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡҡан, йәғни тәҡүәле кешеләр," - тип яуап бирҙе.

Шулай итеп, үҙен Аллаһы Тәғәләнең ҡолo, тип танығн кешенең тормошо тәҡүәле үтергә тейеш. Быны нисек аңларға? Тәҡүәлектә йәшәү - ул Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыу; ерҙә йәшәгәндә үҙенә Йәннәттә урын әҙерләү; Йәннәттең матурлығын тулыһынса төшөнөү; бөтә ерҙә лә Аллаһы Тәғәләнең хикмәтен күрә белеү.

Ҡөрьәндә үҙҙәренең яңылыш эштәре өсөн Аллаһы Тәғәләнән ихлас күңелдән ҡурҡыусылар турәһында әйтелә: "Раббы алдында гонаһлы булыуҙан ҡурҡҡандар өсөн Аллаһы тарафынан әжер бирелер, йәғни баҡсаларында шишмәләр ағып ятҡан мәңгелек йәннәттәр ҡоролор, улар шунда ҡаласаҡ. Аллаһтың һый табыны шул булыр. Улар өсөн Аллаһ хозурындағы ниғмәттәр тағы ла сифатлыраҡтыр".

Тәҡүәлек йөрәктең рухи сәләмәтлегендә, таҙалығында һәм Аллаһы Тәғәләгә йүнәлгәндә ихлас булыуҙа күренә. Бер ваҡыт Мөхәммәт бәйғәмбәр сәхәбәләр менән булған сағында йөрәгенә төртөп: "Тәҡүәлек - бына ошонан сыға", - тигән. Аллаһы Тәғәлә һәр ваҡыт ҡәнәғәт булһын өсөн мосолман кешеһенең йөрәк хәле, иманы, ғибәҙәттәре камил булырға тейеш.

Тәҡүә - иманлы кешенең сифаты. Ул кешенең был донъяла ла, теге донъяла ла бәхетле булыуҙа мәҡсат итеп алған мөһим рухи хәле. Ҡөрьән-Кәримдең 258 урынында тәҡүә турәһында телгә алына. "Эй, иман килтергән бәндәләр! Аллаһтың язаһынан ҡурҡығыҙ, һәр кем киләсәк өсөн нимә әҙерләүе турәһында уйланһын. Аллаһтың язаһынан ҡурҡығыҙ. Аллаһ һеҙҙең нимә ҡылғаныгыҙ менән хәбәрҙар".

Мөттәҡий, тип тәҡүәле тормош алып барыусы мосолманға әйтәләр.

✓ *Баҡай ауылының бер осонда башҡорттар, икенсеһендә татарҙар йәшәй. Архивтан нәҫел-нәсәбем тураһында мәғлүмәт һорағас, хатта бығаса татар тип иҫәпләнгән атайым яҡлап та бар туғандарыбыҙ башҡорт икәнлеге асыҡланды.*



сенән. Икенсенән, диалектыбыҙға күберәк иғибар йәлеп итергә уйлайбыҙ, сөнки ул бөтөнләй юҡ унынан ситтә ҡалған. Һәм был мәсьәлә һауала эленеп ҡалырға тейеш түгел. Икенсе йыл инде диалектыбыҙҙы ҡулланып, башҡорт теленән диктант яҙабыҙ. Йәғни беҙ, ниһайәт, йәмғиәттә танылыу таптыҡ. Хәҙер алға барырға кәрәк. Беҙ барыбыҙ ҙа - башыбыҙҙы юғары күтәреп, тотош республика менән бергә барабыҙ. Беҙ - ғорур башҡорттар, батырҙар, тоньяҡ амурҙары вариҫтары.

**Римма ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА.**
**"Ватандаш" журналынан ҡыҫҡартып алынды.**

# ҺӨЙӨҮҘӘН БАШЛАНА...

**Бөтә ғәмәлдәр ҙә тыуған илгә, телгә, тормошҡа, киләсәккә булған һөйөүҙән инеш ала. Беҙ ошо хәҡиҡәтте инҡар итмәй йәшәйбеҙ икән, тамырыбыҙ нығ, килер көндәребеҙ ышаныслы буласаҡ. Халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы барышында һәр милләт үҙенең тарихи йылъяҙмаһының сағыу биттәрен яҙа. Халкы, шәхестәре, эштәре менән.**

"Ижад - бәхет синонимы" тигән китапта билдәле сәнғәт әһеле, вокал буйынса педагог, профессор, СССР Театр эшмәкәрҙәре союзы ағзаһы, РСФСР-ҙың һәм Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры, Өфөнөң почётлы гражданы Миләүшә Мортазина менән әңгәмәләр килтерелгән. Унда түбәндәге юлдар бар: "Ауыр аслыҡ йылдарына тура килгән бала сағыма ҡарамаҫтан, һөйөү тойоп үҫтем. Минең Кесе Ватаным - Кушнаренко районының Баҡай ауылы. Әнүәр ағайым әйтмешләй, "Баҡай буйға һуҙылған ауыл, бер осонда - башҡорттар, икенсеһендә татарҙар йәшәй. Ә беҙ башҡорт өлөшөндә йәшәнек, беҙ - башҡорттар". Ә мин кем Башҡортостанда тыуған, барыһы ла башҡорттар тип иҫәпләйем, тик беҙ өс телдә - русса, башҡортса һәм татарса һөйләшәбеҙ. Архивтан нәҫел-нәсәбем тураһында мәғлүмәт һорағас, хатта бығаса татар тип иҫәпләнгән атайым яҡлап та бар туғандарыбыҙ башҡорт икәнлеге асыҡланды".

# ТАҒЫ ЛА ӘҮҘЕМЛӘШТЕК

**Туймазы районында үткән Башҡорт ырыуҙары йыйынынан һуң "Без башҡортлар" хәрәкәте етәксеһе Радик Бәхтиев тәьҫораттары менән бүлеште, ошондай саралар йәмәғәтселектең әүҙемлеген арттырыуын билдәләне.**

"Мин тоньяҡ-көнбайыш башҡорто буларак, тоньяҡ-көнбайыш райондарында башҡорт әүҙемселәренең күбәйеүенә ҡыуанам. Башҡорт диалекттары - ул башҡорт теленең айырылғыһыҙ өлөшө икәнен аңлаған, үҙ диалектында һөйләшергә оялмаған милләттәштәр ҡушыла беҙгә. Ырыуҙар йыйындары менән бер рәттән, Рәсәй Фәндәр академияһынан башҡорт тарихына ҡағылышлы фәнни хеҙмәттәр баҫтырылды. Федераль кимәлдәге ғалимдар менән Салауат Хәмиҙуллин, Юлдаш Йосопов эшләне, материалдар һәм темалар тәҡдим итте, конференцияларға саҡырҙы. Иң мөһиме, әлеге ваҡытта беҙ халыҡ араһында аңлау һәм төшөнөү күҙәтәбеҙ. Оло йәштәгеләр туған телдәренең, ниһайәт, танылыуын, үҙ атамаһы менән аталғанын көтөп алды, уның яҙма текстарҙа ҡулланылыуын күрҙе. Был улар өсөн бик мөһим күренеш, ә бөтә башҡорт йәмәғәтселеге өсөн бик файҙалы процесс", - тип билдерҙе Радик Бәхтиев.

# БЕҘ ҠЕҮӘТЛЕ НӘҪЕЛДӘН

**Башҡорттарҙың Балыҡсы ырыуы вәкиле, Асҡын районының тарих-тыуған яҡты өйрәнеү музейы директоры Әнзирә ҒӘНИЕВА һөйләй:**

- Һәр үҫемлек, һәр ағас - тамырынан, һәр йылға шишмәнән сыҡҡан кеүек, беҙҙең Балыҡсы ырыуы ла ошо Асҡын еренә береккән. Хәҙер күптәрҙә нәҫеле, ырыуы менән ҡыҙыҡһыныу, ата-бабаларын хөрмәтләү тойғоһо уянды. Иң мөһиме - кешеләр боронғо быуындарын белеп, тормошоноң мәғәнәһен, маҡсатын аңлап, киләһе быуынға тормош тәжрибәһен, донъяға ҡарашын, нәҫел тарихын ҡалдырыуҙы үҙ бурысы һанай.

Мин үҙем дә 2010 йылда нәҫел шәжәрәмде өйрәнә башланым. Шәүкәт ағай (ул беҙгә туған да) асыҡлауынса, нәҫелебеҙ 20-се быуынға тиклем өйрәнелгән, Майҡы бейгә барып тоташа. Был әле 16 быуын документтар менән раҫланған. Нәҫелебеҙ - бай тарихлы, ғорурланырлыҡ арҙаҡлы шәхестәребеҙ күп. Мәҫәлән, 1812 йылдағы Ватан һуғышында Зәғәфуран Ибраһимов Парижға тиклем барып еткән, ул йөҙ башы булған. Рус армияһына аттар илткән. Тағы ла ҡарт ҡартатайым Хөснийәр хәҙрәт заманаһына күрә бик күренекле шәхес булған. Ул Ҡускилде ауылынан, Солтанбәк ауылына эшкә ебәрелгән. 19-сы быуат аҙағында ауылда ике ҡатлы мәҙрәсә төҙөткән. 50 генә йәшендә мәрхүм булған, беҙ уның бик күп ҡульязмаларын, сәйәхәтнамәһен таптыҡ. Филология фәндәре докторы, ғалим Миңлеғәле Нәҙерғолов был ҡағыҙҙарҙы тәржемә итеп бирҙе. Үҙ ҡулдары менән шәжәрәбеҙҙе яҙып ҡалдырған. Беҙ архив документтары менән сағыштырҙыҡ, мәғлүмәттәр тап килә.

Беҙҙең Асҡын районында шулай уҡ Танып һәм Унлар ырыуҙары вәкилдәре йәшәй. Улар бер-береһенән һөйләштәре, кейемдәре менән айырыла. Хатта бер үк Балыҡсы ырыуына ҡараған ауылдарҙа ла һөйләш бер иш түгел.

Кейемдәргә килгәндә, ҡатын-ҡыҙҙар балитәкле күлдәк кейгән, ир-егеттәр ҡыҙыл, һары төҫтәрҙе айырыуса үҙ иткән. Йөҙ йылдан ашыу элек тегелгән күлдәктәрҙе таптыҡ, улар музейҙа һаҡлана. Ошо кейемдәргә ҡарап, тергеҙеп, бөгөн дә шундай күлдәктәр кейеп йөрөй алабыҙ. Ағинәйҙәребеҙ быны ғәмәлгә ашырып та ҡуйҙы инде.

Ҡайһы берәүҙәр: "Шәжәрәләрҙе өйрәнеү нимәгә кәрәк ул һиңә?" - тип һорай. Ә ул минә рухи көс бирә. Шәжәрәне өйрәнгәндә ата-бабаларыбыҙҙы иҫкә алабыҙ, доғалар ҡылабыҙ, яҡшы яҡтан телгә алабыҙ бит инде - улар һөйөнөп яталарҙыр. Үткәндәрҙе өйрәнергә ата-бабалар тауышы саҡыра. Ерҙә нығҡлы баҫып торор өсөн тамырҙарыңды белеү мотлаҡ...

Нәҡ тәҡүәле кешегә Ҡөрьән-Кәримдә яҙылғандар нығыраҡ аңлашыла, уның йөрәге бөтә хәҡиҡәтте ҡаршылыҡһыҙ ҡабул итә. Баҡара сүрәһенең 2-се аятында был турала әйтелә: "Шөбһәһеҙ, был китап мөттәҡийҙәр өсөн юл күрһәтеүселәр".

Аллаһы Тәғәлә иманлы кешеләрҙең бөйөк кимәлгә етеүен, һәр тын алышы тәҡүәлек менән тулы булыуын теләй. Аллаһы Тәғәлә тәҡүәле ҡолдарына ысынбарлыҡты аса, хәҡиҡәттең асылын аңлата, насарҙан - яҡшыны, аҙашыуҙан хәҡиҡәтте айырыуҙа зирәклек, тура юлдан яҙлыҡмаҫ өсөн нур һәм ҡеүәт бирә.

Тәҡүәлеккә ынтылған кеше камиллыҡҡа ла өлгәшә ала. Иң тәүҙә тәҡүәле кеше харамдан баш тартырға тейеш. Аҙаҡ уға мәкрүх эштәрҙән (Ислам ҡүҙлегенән ҡарағанда, үтә хупланмаған) йыраҡ торорға кәрәк. Һәр хәрәкәте, әйткән һүҙҙәрен уйлап һөйләргә, бөтә шикле нәмәләрҙән ҡасырға тейеш. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис сәләм: "Кем шикле нәмәнән ҡаса, үҙенең иманын һәм намыҫын ҡотҡара, ә кем шикле нәмәгә иғтибар бирмәй, ваҡыт үтеү менән гонаһ эшләп ҡуйыуы бар", - тигән. Үҙенең һүҙҙәрен көтөүсе миҫалында нығытып ҡуйған. Ят баҫыуҙың эргәһендә генә көтөүсе малдарын көтә, ти. Йәйләйәйләп көтөү, биләмә сиктәрен үтеп китеп, күршеләр хоҡуғын боҙоуы бар...

Тәҡүәле һәм ихлас мосолман хатта хәләлдә лә үҙенә сик ҡуйыуы мөмкин. Мәҫәлән, исраф итмәҫкә, Аллаһы Тәғәләнең биргән байлығын тұҙҙырмаҫҡа, әҙ менән ҡәнәғәт булырға һ.б.

Тәҡүә - Аллаһы Тәғәләнең һағында булыу. Уның һағында булыу өсөн ул тыйғандарҙан тыйылырға, тик уның бойороҡтарын үтәп кенә йәшәргә тейеш. Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында яуап тотасаҡ көн бар икәнен иҫтә тотоп, Уның асыуынан ҡурҡып, Уның күләгәһенә ышыҡланыу. Бының өсөн эске торошто насар сифаттарҙан, әҙәпһеҙлектән ҡотолдорорға кәрәк. Кеше үҙенең талантын асырға, рухи бейеклеккә, камиллыҡҡа ынтылырға тейеш.

Яҡшылыҡты ямандан айырыуҙа һиҙгерлекте юғалтыу - иң ҡурҡыныс ауырыу. Тәҡүә - тик Ҡөрьән һәм сөннәт буйынса ғына йәшәү. Мосолман булған белемен тормошонда ҡулланып йәшәп, ғаиләһе менән дә, йәмғиәт менән дә, үҙе менән дә дөрөҫ мөнәсәбәт ҡора белергә тейеш. Белеме күбәйгән һайын кешелә йөрәк аҡылы, зирәклек арта.

Тәҡүә - Аллаһы Тәғәлә менән кешенең йөрәге осрашыу ул. Был кешенең йөрәгендә ошо матур сифаттарҙың туплаңыуын аңлата: рәхимлелек, изгелек, ғәфү итә белеү, мәрхәмәтлек һ.б. Тәүбәлә ихласлыҡ та тәҡүәлектән килә.

Тәҡүәлек - йөрәктең һөйөү менән тулыуы. Ҡайһы саҡ кешенең тормошонда ауыр ваҡыттар ҙа була. Ошо ваҡыттарҙы сабыр үткәреп ебәрер өсөн иң тәҡүәле кеше булған Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тормошона ҡарарға кәрәк. Ул ниндәй генә ауырлыҡтар, ҡыйын саҡтар булмаһын, сәхәбәләренә тәҡүәлекте юғалтмаҫҡа ҡуша.

Мосолман кешеһе тәҡүәлеккә кире тәьҫир итә торған сифаттар бар икәнен дә иҫендә тоторға тейеш. Бына улар: ғорурлыҡ, үҙенде башҡаларҙан өҫтөн тотоу, һаранлыҡ, битарафлыҡ.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Өндәге төш тотторған бәхетле билет

Смит исемле кеше тураһында шундай тарих һөйләйҙәр. Ул доғалар уҡып ултырған бер мәлдә Ижадсыға үҙенең проблемалары тураһында зарлана: "Минең бизнесым көрсөк кисерә. Бары тик лотереяла отоу ғына ярҙам итә аласаҡ. Зинһар, отош минә сыҡһын өсөн ярҙам ит".

Әммә Ижадсы уға ярҙам итмәй. Смит аптырашта ҡала. Ул тағы бер тапҡыр бәхетен һынап ҡарамаҡсы булып, ҡабат Ижадсыға мөрәжәғәт итә: "Минең бизнесым бөтөнләй үлде. Бурыстарым артты, һәм мин артабан нисек йәшәү, нисек тере ҡалыу тураһында ғына уйлайым. Бары тик лотереяларҙ отош ҡына минең финанс хәлемде яҡшырта аласаҡ".

Әммә был юлы ла Ижадсы ярҙам итмәй. Смит өсөнсө тапҡыр бәхетен һынап ҡарарға була. "Ҡәҙерле Ижадсы, хәҙер мине ҡатыным ташлап китте. Нимә эшләргә?"

Шулай тип әйтеп тә бөтмәй, уның башынан бер уй үтеп китә: "Смит, ниһайәт, лотерея билеты һатып ал инде".

Ошо хатаны ҡабатламағыҙ, тип әйтмәксемен. Лотерея билеты һатып алмай тороп, отош көтмәгеҙ. Ғәҙәти лотерея билеттарынан айырмалы, рухи лотерея билеттары ла һәр саҡ отошло. Үҙегеҙҙең именлекте, башҡаларҙың именлеген күҙ алдына килтереп, ошо хаҡта Хоҙайға теләктәр ебәреп, һеҙ шундай рухи отошҡа өлгәшә алаһығыҙ.

Донъяның һеҙҙең ярҙам талап ителгән проблемалары:

Һеҙҙең доғалар ваҡытында уйлаған уйҙарығыҙ күп, әлбиттә. Әммә барлыҡ мәсьәләләрҙе лә бер юлы хәл итергә ынтылырға кәрәкмәй. Уларҙың үҙегеҙҙе үтә нығ борсоған бер нисәһен һайлап алып, уларға ижади энергиягыҙҙы йүнәлтергә һәм бәхетле билетты тартып алырға кәрәк. Һайлау еңеләшһен өсөн, бер нисә миҫал:

- Таныштарың араһында эшһеҙлектән ашарға аҡсалары булмағандар, ярым ас йөрөгәндәр бар.
- Балалар араһында һыра алкоголиктары, енәйәтселәр, фәхишәлек арта бара.
- Донъя кимәлендә тыныслыҡҡа хәүеф менән янаған милләт-ара низағтар, террорсылыҡ осраҡтары күп.
- Урындағы һәм федераль власть органдарындағы коррупция сәскә ата.
- Һеҙҙең йәшәйешкә тынғылыҡ бирмәгән башҡа ҡайһы бер кире күренештәр ҙә етерлек.

Иғтибар итегеҙ, һанап үтелгәндәр - дөйөм проблемаларҙың аныҡ сағылышы. Улар тураһында уйлап, доғаларығыҙҙа ошо проблемаларҙың хәл ителешен һораһағыҙ, Хоҙай, моғайын, ишетер һәм ярҙам итер. Ошо рәүешле айырым кешеләргә йәки ғаиләләргә ярҙам итергә мөмкин. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ әле, күршегеҙҙең өйҙән ҡасып сығып киткән улы кире ҡайтҡан, сирле туғаныгыҙ һауыҡҡан, таныш кешегеҙ абруйлы колледжға уҡырға ҡабул ителгән. Хәл ителешен күҙаллай алған проблема - һеҙ хәл ителешенә йоғонто яһай алған проблема ул.

Ниндәй ярҙам һорап мөрәжәғәт итһәгеҙ ҙә, Ижадсы ишетер, тик унан килгән барлыҡ ярҙам да лотерея билетегыҙ өсөн түләү хаҡы буласаҡ. Шуға башта лотерея билетын һатып алығыҙ, йәғни теләктәрегеҙ ысынбарлыҡҡа тап килһен һәм ихлас булһын.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 1 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Медиум". [12+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30, 5.00 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45, 20.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Перед рассветом". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Кьоджинские перепалки". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 2 НОЯБРЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Медиум". [12+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Хазина о хазине". [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Праздничный концерт ко Дню работника сельского хозяйства и перерабатывающей промышленности. [12+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Военно-полевой роман". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Оль-ля-ля". [12+]**
**5.15 Мы дети войны. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 3 НОЯБРЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Юморина-2021. [16+]
23.00 Веселья час. [16+]
0.55 Х/ф "На обрыве". [12+]
4.23 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск). КХЛ.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "И ты увидишь небо". [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**5.15 "100 шагов на войне..." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 4 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

4.25 Х/ф "Крепкий брак". [16+]
6.00 Т/с "Дневник свекрови". [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести. День народного единства.
11.45 Х/ф "Штамп в паспорте". [12+]
16.35 Аншлаг и Компания. [16+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Х/ф "Пальма". [6+]
23.20 Х/ф "Земля Эльзы". [12+]
1.25 Россия. Нам 30 лет! [12+]
2.25 Х/ф "Я все преодолею". [12+]
5.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "С Днем народного единства!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**8.45 Д/ф "Вся жизнь - мечта. Талха Гиниятуллин". [12+]**
**9.15, 11.45, 15.30 Этно-краса. [12+]**
**9.30 "Это Родина моя!" Концерт. [0+]**
**10.00 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Это мы! [12+]**
**12.00, 3.15 Концерт "Наш дом - Башкортостан". [12+]**
**13.00 Спектакль "Махтымсылу, Абляй и Кара юрга". [12+]**
**15.45, 5.30 Д/ф "Свет во тьме". [12+]**
**17.00 Концерт Бибисары Азаматовой. [12+]**
**19.00 "Этно-краса". [12+]**
**19.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**19.30 "Филармония-24". Концерт Нефтекамской филармонии. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00, 4.15 Х/ф "Здесь твой фронт". [16+]**
**1.45 Спектакль "Судьба выбранная мной". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 5 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

6.00 Т/с "Дневник свекрови". [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Х/ф "Пальма". [6+]
13.50 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
15.50 Х/ф "Укрощение свекрови". [12+]
18.05, 20.30 Х/ф "Укрощение свекрови. Продолжение". [12+]
22.30 Шоу большой страны. [12+]
0.55 Х/ф "Любимые женщины Казановы". [12+]
4.18 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 19.00, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15, 4.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**8.45 Д/ф "Вся жизнь - мечта. Талха Гиниятуллин". [12+]**
**9.15, 23.30 Автограф. [12+]**
**9.45 История одного села. [12+]**
**10.00 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45, 4.45 Д/ф "Аксакал". [12+]**
**12.30 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**
**14.30 "Алтын тирмә". [0+]**
**15.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск). КХЛ.**
**19.30 "Когда зажигаются звезды". Концерт Сибайского концертно-театрального объединения. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Барышня-крестьянка". [0+]**
**2.30 Спектакль "Гайфи агай, женись давай!". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 6 НОЯБРЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1

4.20 Х/ф "Лекарство для бабушки". [16+]
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.35 Т/с "Город невест". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Дура". [12+]
1.15 Х/ф "Любовь с испытательным сроком". [12+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Д/ф "Вся жизнь - мечта. Талха Гиниятуллин". [12+]**
**9.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Это мы! [6+]**
**11.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 4.15 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Наступит день..." [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [12+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Бәйге". Башкирские игры. Чемпионат между башкирскими родами по силовому многоборью. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Подземелье ведьм". [0+]**
**2.15 Спектакль "Кавардак Forever". [12+]**
**4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 7 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.20, 3.10 Х/ф "Васильки для Василисы". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Парад юмора. [16+]
13.15 Т/с "Город невест". [12+]
18.00 Дуэты. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.30 Х/ф "Пара гнедых". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Д/ф "Вся жизнь - мечта. Талха Гиниятуллин". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Это мы! [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 "Ете егет". [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 "Дорога к храму". [0+]**
**15.45, 3.15 Историческая среда. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск). КХЛ.**
**19.15 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 4.30 Х/ф "Аты-баты, шли солдаты..." [12+]**
**1.00 Спектакль "Очень простая история". [12+]**
**3.00 История одного села. [12+]**
**3.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**2 ноябрь "Амеля"** (А. Балгазина, Н. Крашенинников). 12+
**3 ноябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, А. Ишбулдина). 12+
**4 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 16+
**5 ноябрь "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович). 16+
**6 ноябрь "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 18.00 16+
**7 ноябрь "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**4 ноябрь "Синяя птица"** (М. Метерлинк), әкиәт. 12.00 6+
**5 ноябрь "Пеппи Длинный чулок"** (А. Линдгрен), мажара. 12.00 0+
**6 ноябрь "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 12.00 0+
**"Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+
**7 ноябрь "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**3 ноябрь "О чем поет орнамент?"** (В. Аношкин). 12+
**4 ноябрь Премьера! "Кошкин дом"** (С. Маршак). 11.00, 13.00 0+
**4, 5, 6, 7 ноябрь "О чем поет осень?"** (В. Щербакова), бэби-спектакль. 16.00 0+
**5 ноябрь "Красная шапочка"** (Ш. Перро). 11.00, 13.00 0+
**6 ноябрь "Буратино"** (А. Толстой). 11.00, 13.00 0+
**7 ноябрь "Приключения доктора Айболита и его друзей"** (К. Чуковский). 11.00, 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**4 ноябрь "Приключения лентяя в подводном 3Девятом царстве"**. 12.00 0+
**Премьера! "Под одним небом"** Рус халыҡ инструменттары оркестры концерты. 18.00 6+
**5 ноябрь "Атты ектем! Айға осам..."** (В. Шукшин), комедия. 18.00 12+
**6 ноябрь "СуперЗаяц"** (И. Чернышев), әкиәт-комедия. 12.00 0+
**"Килдең, киттең - хуш, байғош..."** (М. Задорнов), лирик комедия. 18.00 12+
**7 ноябрь Премьера! "Занимательная наука - музыка"**. 12.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**1 ноябрь Альберт Салауатовтың** концерты. 12+
**2-3 ноябрь "Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 12+
**6 ноябрь "Золушка"** (Е. Шварц), әкиәт. 0+
**"Әүлиә"** (Л. Яҡшыбаева). 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Ноябрь (Рабиғел әүүәл - Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (26) дүшәмбе | 6:50 | 8:20 | 13:30 | 16:07 | 17:37 | 19:07 |
| 2 (27) шишәмбе | 6:53 | 8:23 | 13:30 | 16:05 | 17:35 | 19:05 |
| 3 (28) шаршамбы | 6:55 | 8:25 | 13:30 | 16:03 | 17:33 | 19:03 |
| 4 (29) кесе йома | 6:57 | 8:27 | 13:30 | 16:01 | 17:31 | 19:01 |
| 5 (30) йома | 6:59 | 8:29 | 13:30 | 15:59 | 17:29 | 18:59 |
| 6 (1) шәмбе | 7:01 | 8:31 | 13:30 | 15:57 | 17:27 | 18:57 |
| 7 (2) йәкшәмбе | 7:03 | 8:33 | 13:30 | 15:55 | 17:25 | 18:55 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

Класташыбыҙ
**Гөлшат Ноғман ҡыҙы Мусинаның**
вафаты айҡанлы уның атаһы, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусиндың, тормош иптәше Ринаттың ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ. Гөлшат дуҫыбыҙ матур күңелле, уңған, яҡындарына, дуҫтарына ҡарата хәстәрлекле кеше булып, беҙҙең хәтерҙәрҙә оҙаҡ һаҡланасаҡ.

*Өфөләге 20-се ҡала Башҡорт гимназияһын 1978 йылда тамамлаусы класташтары.*

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

✓ *Бөтә теләктәр ҙә бойомға ашыуҙан кешеләр бәхетлерәк булып китмәҫ ине.*

*(Гераклит Эфессакий).*



СӘЙЕР ШУЛ

# КӨН ДӘ БАЙРАМ, КӨН ДӘ ТУЙ...

**Һуңғы арала байрамдар күбәйеп китте. Көн дә байрам, көн дә туй, тигәндәй. Интернетты ҡабыҙыуың була, ватсаптан иртән иртүк ниндәйҙер байрам менән ҡотлап, таныштоноштарҙан, туғандарҙан, дуҫтарҙан открыткалар "яуа" башлай. Ҡатын-ҡыҙ бәхете көнө, бөҙрә сәслеләр, тәмлетамаҡтар көнө, сәй, бәлеш, икмәк көнө... Һанай китһәң, ысынлап та, ниндәй генә көндәр юҡ та, ниндәй генә байрамдар юҡ икән! Хайран ҡалырлыҡ.**



Интернет селтәрендә бер гүзәл зат ҡатын-ҡыҙ бәхете көнөндә ирем ҡотламаны, шул сәбәпле ныҡ ҡына һүҙгә килештек тә, әле булһа һөйләшмәй йөрөйбөҙ, арабыҙ һыуынды, тип яҙған да, шул төркөмдә ултырған ҡатын-ҡыҙҙар уны йыуатып, комментарийҙар теҙгән, ирҙәрҙе яман һүҙҙәр менән әрләгән, хатта айырылышырға кәңәш биргән. Ә бәхет төшөнсәһенең тәғәйен көнө бармы икән ул? Хәҙер бер-беребеҙҙе һары япраҡ йә булмаһа йөҙөп барған болоттар көнө менән (баҡһаң, шундай көндәр ҙә бар икән!) ҡотларға онотһаҡ, яҡындар менән аралар һыуынып, ғаиләләр тарҡалып бөтәсәкме? Башҡа һыймаҫлыҡ хәл бит!

Һөнәри байрамдар һәм рәсми теркәлгән көндәр барлығын бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ, ә бына йыллы яҡҡа киткән ҡоштарға хәйерле юл теләү йә булмаһа йылы әйберҙәр көнө билдәләнгәнен белә инегеҙме? Байрамдар быным менән генә бөтмәй әле. Баҡһаң, йоморҡаның, бутканың, эшләп торған сәғәттең дә тыуған көндәре бар икән! Бер танышым ҡабаҡ көнө менән ҡотлап, открытка ебәрә, икенсеһе тәтлы печеньеһыҡы менән... Уларҙың бер ниндәй әһәмиәткә эйә булмағанын белһән дә, иртәнән кискә тиклем ҡотлауҙар ҡабул итеп ултырырға тура килә инде.

Октябрь айында ла әллә ниндәй туҙға яҙмағандары күп кенә булды байрамдарҙың. Ел, ҡара бөрләгән, кәнфит көндәре тап ҡарасайҙа билдәләнде.

Улар араһында күңелһеҙерәк даталар ҙа юҡ түгел. Бына, мәҫәлән, ҡулдан ысҡындырылған мөмкинлектәр көнө. Исеме үк эсте бошора, шулай бит? Был көндә, ғәҙәттә, ҡотлау һүҙҙәре яңғырамай, ә бөгөн бер генә мөмкинлеген дә ҡулындан ысҡынмаһын, бөтә хыялдарың тормошҡа ашһын кеүегерәк теләктәр теләнә.

Бына шулай, дуҫтар. Күңелендә байрам йөрөткән кешегә көн дә байрам, тиһәләр ҙә, тормошта илап ебәрмәҫ өсөн ҡысҡырып көлгән ваҡыттар ҙа була. Ватсаптан бығаса ҡолаҡ ишетмәгән берәй көн менән ҡотлап, открытка килеп төшһә, ял итергә өйрәнеп киттекме, әллә үҙебеҙҙең кәйефте үҙебеҙ күтәрергә, был ҡатмарлы тормошто байрамға әйләндерергә тырышҡан булабыҙмы, тигәнерәк уйҙар тыуа. Иламаҫ өсөн көлөргә тырышыуға ла оҡшап китә был...

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУЛДАН КИТКӘН...

## ҡулға кермәй

Аптыраш менән йөҙәш икәүһе кергән өйҙәш.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Буш хәбәр һөйләүселәр ахмаҡ түгел, нимә һөйләгәндәрен үҙҙәре аңламағандар ахмаҡ.

**(Осип Брик).**

Аллаһ кешене үҙ һыны, үҙ ҡиәфәтенә оҡшатып яратһа, беҙ ҙә уға шуның менән яуап ҡайтарғанбыҙ.

**(Вольтер).**

Азатлыҡҡа хаталаныу хоҡуғы инмәһә, азатлыҡ бер тин дә тормай.

**(Махатма Ганди).**

Намыҫ - ул изге юлды яҡтыртыр шәм, насар юлда ул ярыла.

**(Фридрих Гегель).**

Ир-егет өсөн бәхет - ул кисен ҡайтып килгәндә ниндәйҙер ҡатын-ҡыҙҙың һиненең атлау тауышын тыңлап тороуын белеү.

**(Кларк Гейбл).**

Ҡатын-ҡыҙҙың нәфрәте - ул шул уҡ мөхәббәт, тик кирегә боролған мөхәббәт.

**(Герних Гейне).**

Бөтә теләктәр ҙә бойомға ашыуҙан кешеләр бәхетлерәк булып китмәҫ ине.

**(Гераклит Эфессакий).**

Тыныс тормошта улдар аталарын күмә, һуғышта - аталар улдарын.

**(Геродот).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер бай кеше Сенгай тигән аҡыл эйәһен саҡырып алған да унан үҙ ғаиләһе быуындан-быуынға гел бәхетле йәшәһен өсөн берәй нәмә яҙырға ҡушҡан. Сенгай ҙур ҡағыҙ бите алған да, шулай тип яҙған:**

**"Атай үлгән, улы үлгән, ейәне үлгән".**

**Бай асыуланған:**

**- Мин ғаиләмдең бәхете өсөн берәй нәмә яҙырға һораным. Ниңә һин шулай әҙәпһеҙ итеп шаяртаһың?**

**- Мин шаяртырға уйламағайным да, - тип яуап биргән Сенгай. - Улың һинән иртәрәк үлһә, һин ныҡ бәхетһеҙ буласаҡһың. Ейәнең улыңдан иртә вафат булһа, икегеҙҙең дә йөрәгегеҙ ярыласаҡ. Әгәр ҙә ғаиләңдә быуындан-быуынға бөтәһе лә мин яҙған тәртиптә донъя ҡуйһа, был ғүмерҙең тәбиғи хәрәкәте буласаҡ".**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# СИТТӘ ЙӘШӘҺӘК ТӘ...

**Барселона янындағы Матаро тигән ҡалала Испанияла йәшәүсе халыҡтарҙың этник мәҙәниәте фестивале үтте. Уның маҡсаты - донъяның төрлө халыҡтарының мәҙәни йолалары менән таныштырыу, уларҙы һаҡлау һәм пропагандалау, милләт-ара бәйләнештәрҙе ныҡытыу.**



- Башҡортостандан сыҡҡан милләттәштәребеҙ ҙә был байрамда ихлас ҡатнашты һәм йыр, бейеү, музыкаль композиция менән сығыш яһап, тамашасыларҙың һәм сараны ойоштороусыларҙың иғтибарын яуланы. Барселона, Севилья, Сарагосала йәшәгән башҡорттар ошондай сараларҙа даими рәүештә башҡорт мәҙәниәтен, йолаларын, аш-һыу өлгөләрен күрһәтеп, әүҙем ҡатнаша килә. Уларҙың әүҙемлеге, һәр сараға ихлас ҡушылырға әҙер тороуы испандарға бик оҡшай, улар башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәте менән танышырға ярата, - тип бәйән итә Барселонала йәшәүсе Гөлгенә Ғәйнуллина. - Сәнғәт теле башҡа бөтә телдәрҙе юҡҡа сығара. Тыуған илемдән алыҫта йәшәһәм дә, башҡорт рухын онотмайым, башҡаларға халҡыбыҙҙың йолалары тураһында һөйләй алыуым менән бәхетлемен...

# БЕҘҘЕКЕЛӘР БЕЙЕЙ

**Санкт-Петербургта Башҡортостан мәҙәниәте көндәре булып үтте. Сара Ф.Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле сығыштары менән асылды.**

Ленсовет исемендәге мәҙәниәт һарайы сәхнәһендә ғәскәровсылар "Донъя халыҡтары бейеүҙәре" программаһын күрһәтте. Был кисҭә тамашасылар башҡорт хореографияһының сағыу өлгөләрен ҡарауға өлгәште. "Санкт-Петербургтағы Башҡортостан мәҙәниәте көндәре ғәскәровсыларҙың матур концерты менән асылыуына шул тиклем шатбыҙ. Артистарҙың юғары профессионаллеге, легендар бейеүҙәр берәүҙе лә битараф ҡалдырманы. Һәр сығыш дәррәү алҡыштарға күмелде", - ти Санкт-Петербург башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Гөлназ Ибраһимова.

Йолаға әйләнеп киткән башҡорт бейеүе буйынса оҫталыҡ дәресен ансамблдең әйҙәүсе солисы Эльвира Муллағолова үткәрҙе. Бында Санкт-Петербургтағы "Аманат" студенттар бейеү коллективы менән "Наза" фольклор ансамбле лә ҡатнашты. "Оҫталыҡ дәресе беҙгә дәрт өҫтәне, күп кенә үҙенсәлектәр тураһында белдек. Яңы һабаҡтарҙы үҙебеҙҙең бейеүҙәрҙә ҡулланырға иҫәп тотабыҙ", - тип фекерҙәре менән уртаҡлашты оҫталыҡ дәресендә ҡатнашыусылар.

Ансамбль гастролдәрен "Беҙ - Рәсәй" милли коллективтар гастролдәре" программаһына ярашлы, Мәҙәниәт министрлығы планы буйынса "Росконцерт" ойошторған. Ғәскәровсылар Рәсәй ҡалалары буйлап ҙур тур сиктәрендә Тверь, Бөйөк Новгород, Питер, Тихвин, Великие Луки, Мәскәү һәм Владимирҙа концерттар ҡуйҙы.

# КҮҢЕЛ ЙЫЛЫНДЫ

**Сочи ҡалаһында йәшәгән милләттәштәребеҙҙән дә матур хәбәр алдыҡ. Күптән түгел бында ла "Аманат" башҡорт йәмғиәте бик матур кисә ойошторған.**

- Йыр, бейеү, шиғыр һөйләү - былар барыһы бергә тотош мини-спектаклгә әйләнде, - тип яҙған Сочи башҡорттары. - Балалар ҙа өлкәндәрҙән ҡалышманы, иң ҡыйыуҙары иһә бейергә төшөп китте. Башҡортостандан килгән виртуоз музыкант Азамат Зәйнетдинов көтөп алынған ҡунаҡ булды, ул ҡурайҙа, ҡумыҙҙа көйҙәр уйнап ишеттерҙе. Өфө ҡунағы сәхнә түрено ҡабат-ҡабат саҡырып сығарҙылар. Тамашасылар үҙешмәкәр йырсыларҙың сығышын да яратып тыңланы. Рәмил Йыһаншин башҡарыуында "Картаймасы, әсәй" йырын ишеткәс, бик күптәрҙең күҙҙәренә йәш эркелде. Балалар өсөн рәсем конкурсы ойошторолдо. Һәр сабый үҙенең һүрәтендә ата-бабаларының тарихына ҡарата иғтибарын, һөйөүен сағылдыра алды. Уларҙың барыһына ла бүләктәр, маҡтау ҡағыҙҙары, рәхмәт хаттары тапшырылды. Үҫеп килгән быуындың ошондай саралар ярҙамында милли мәҙәниәткә, халыҡ йолаларына ылығыуы бик матур күренеш.

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 21044

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
29 октябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 1310